✓ *Боронғо герман армияһында шундай принцип хөкөм һөргән: һалдат ниндәйҙер күңелһеҙ хәлвәҡиғаға тарығандан һуң шунда уҡ ялыу яҙырға тейеш булмаған. Үҙенең үпкә тойғоһон еңергә өйрәнһен, ҡыҙыулылығын ауыҙлыҡлаһын өсөн, һалдат бер төн йоҡлай һәм һыуынырға тейеш була. Әгәр ҙә ул ошо ҡағиҙәне күҙәтмәйенсә, шунда уҡ ялыу яҙһа, уны хөкөм иткәндәр.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№20 (490)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Был донъя - бесән ҡыуышы...**



3

**Хөкүмәт ярҙам итә...**

йәштәр баш тарта



5

**Ҡомартҡылар...**

аҡса менән баһаланмай



7

**Мәғлүмәт быуатына аяҡ баҫабыҙ...**



8-9 ә мәғлүмәтле кеше донъя менән идара итә

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Илебеҙҙә тотош бер нисә быуын пионерҙар ойошмаһы йоғонтоһонда тәрбиәләнде. Бөгөнгө балалар һәм үҫмерҙәр өсөн дә шуға оҡшаш берәй тәрбиә мәктәбе кәрәкме?

***Вәкил ХАЖИН, педагогия фәндәре кандидаты:*** Пионерия беҙҙең илгә генә хас күренеш булманы, ул башҡа илдәрҙә лә бар, мәҫәлән, скауттар хәрәкәте киң билдәлелек алған. Балалар ойошмаһы булдырып, йәмғиәт йәш быуынды үҙ ҡоролошона ярашлы һәм яраҡлы итеп тәрбиәләй. Совет осоронда йәштәрҙе буласаҡ коммунизм төҙөүселәр тип, коммунистик рухта тәрбиәләһәләр, демократик илдәрҙә үҙҙәре һайлаған йүнәлештә эш алып барыла. Пионер ойошмалары иһә үҫмерҙәрҙе бер коллективҡа туплап, берҙәмлеккә, татыулыҡҡа, батырлыҡҡа, тәртипкә өйрәтте, уларҙа илгә һөйөү, тоғролоҡ сифаттары тәрбиәләне. Пионер ойошмаһынан һуң комсомолға килдек, ул да аҙмы-күпме йәштәрҙе тәрбиәләүгә үҙ өлөшөн индерҙе. Бөгөн иһә бер ниндәй ҙә тәрбиә эше юҡ, сөнки ил үҙе лә белмәй ниндәй юлдан барырға. Ил кимәлендә дөйөм идеология юҡ. Балаларҙы нимәгә уҡыталар, нимәгә өйрәтәләр - быға хатта белгестәр үҙҙәре лә аныҡ ҡына яуап бирә алмай. Бөгөн балалар мәғлүмәтте күбеһенсә интернеттан йә булмаһа урамдан ала. Шуға күрә үҫмерҙәрҙе берләштерә, тәртипкә күндерә торған берәй ойошма кәрәктер, тип иҫәпләйем, ләкин унын элекке пионерия атрибуттарын ҡабатлауы мотлаҡ түгел. Әйткәндәй, пионерия хатта үҙенең тышҡы атрибуттары менән дә тәрбиә бирә ине. Мәҫәлән, ҡыҙыл галстук тағып йөрөү генә лә баланы насар эш ҡылыуҙан тыйып тора ине. Хәҙер үткәнде тәнҡитләргә яратһалар ҙа, унын ыңғай яҡтарын да танымай булмай. Балаларға тәрбиә биреүҙә пионер ойошмаһының файҙаһы ҙур булды: унын сафтарынан ысын мәғәнәһендә илһөйәрҙәр үҫеп сыҡты. Тап ана шул идеология булған өсөн дә илебеҙ Бөйөк Ватан һуғышында еңде. Идеология булмаһа, белмәйем, еңеп булыр инеме икән фашизмды? Ул саҡта донъя әлеге йәштәр ҡулында булһа, 20-30 миллионлап кеше уйлап та тормай "теге яҡҡа" сығып китәсәк ине. Патриоттар, тигәндән, әле үҙегеҙ күрәһегеҙ, илебеҙ ҡеүәтен арттырыу хаҡына ең һыҙғанып эшләү урынына, Ватанын ташлап сит илгә сығып китеүселәр бихисап. Шуның өсөн дә беҙгә йәштәр рухын күтәрерҙәй идеология кәрәк. Тик үҙебеҙҙең ерлектә, милли идеяларға һәм традицияларыбыҙға нигеҙләнгән булырға тейеш ул.

***Флүр ҒӘЛИМОВ, яҙыусы:*** Әлеге көндә лә үҫмерҙәр һәм йәштәр өсөн ниндәйҙер ойошма кәрәк, тип уйлайым. Әлбиттә, ул үткәндәгеләрҙе тулыһынса ҡабатлау түгел, ә балалар күңелен йәлеп итерлек, уларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ заманса, яңыса булһын, шул уҡ ваҡытта үткән йылдарҙағы эш тәжрибәһенең дә иң яҡшы, иң файҙалы алымдарын үҙләштереү яҙыҡ булмаҫтыр. Был, әлбиттә, балалар аңына ниндәйҙер идеологияны көсләп тағыу түгел, ә урамда ҡалған үҫмерҙәрҙе бергә туплау, аралаштырыу, яҡшылыҡ, изгелек нигеҙҙәренә өйрәтеү өсөн кәрәк. Бөгөн статистикаға ғына күҙ һалһаң да иҫ китерлек бит: аҙым һайын тәмәке тартыу, эсеү, наркомания, һуғышыу, суицид, урлашыу кеүек бөгөнгө үҫмерҙәр портретын хасил иткән иң алама сифаттарға юлығаһың. Был бит уларҙың аңы аҙашыуҙан, баш төртөр күңел донъяһы, таяуы булмауҙан килеп сыҡҡан фажиғәләр. Йәш быуынды заман сирҙәренән йолоп ҡалайыҡ, тиһәк, шунын өсөн кәрәк тә инде беҙгә балаларҙы, үҫмерҙәрҙе үҙ артынан әйҙәүсе идеология. Улар күңеленә иман нигеҙҙәрен күндереү фарыз. Ҡотҡарһа, хәҙер иман ғына ҡотҡарыр донъяны. Әлегә беҙ үҙ милләттәштәребеҙ араһында ғына ла балаларҙы иман шартына килтерһәк, уларҙы намаҙға баҫтырһаҡ, беҙҙән дә бәхетле йәшәгән халыҡ булмаҫ ине. Мордовияла мин өс мосолман ауылын беләм. Бөтәһендә лә мәсеттәр бар, ә халҡы йөҙ проценты менән намаҙҙалар. Һәм шул халыҡ ифрат бәхетле, матур йәшәй. Донъялары бөтөн, етеш, 2-шәр ҡатлы йорттар һалдыралар. Әле яңы уҡыу йылынан 4-се кластарҙа "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" тигән яңы дәрес индереләсәк, тик ул ғына балаларҙы дин тоторға өйрәтерме икән? Ә шулай ҙа күп нәмә уҡытыусының интеллект һәм белем кимәленә, һөнәр оҫталығына бәйле буласаҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ*

# ИКЕ ДАНАЛАП АЛДЫРАМ...

**Мин "Киске Өфө"нө күп йылдар алдырам, бик оҡшай. Шул тиклем киң мәғлүмәтле, ифрат шәп баҫма! Шуға ла быйыл тәүге ярты йыллыҡта хатта ике дана алдырабыҙ уны.**

Беҙгә ике дана "Киске Өфө" килгәнгә барыһы ла аптырай. Әле ошо көндәрҙә генә хәләл ефетем менән ярышып "Киске Өфө"нө уҡып ултыра инек, бер ауылдаш ҡатын килеп инде. "Былар ҡалай килештерә, әбей-бабай икеһенә ике "Киске Өфө" алдыра, берәү етмәйме ней?"- ти. Шунан һуң беҙҙең "Ватандаш", "Йәшлек", "Башҡортостан ҡыҙы", "Тамаша", "Ағиҙел", урыҫ телендәге башҡа журналдарҙы алдырғанға иҫе китте. "Шул тиклем баҫмаларҙы алдырырға пенсияғыҙ етәме?"- тип аптырай. "Ә мин гәзит-журнал алдырмаған милләттәштәремә аптырайым", - тигән булдым яуап итеп.

Ысынлап та, башҡорт телендәге баҫмаларҙы алдырмаған уҡытыусылар ҙа күп ул хәҙер. Ауылдарҙа ғына түгел, ҡалаларҙа хәл бөтөнләй мөшкөл, ахыры. Бына Өфөлә йәшәгән яҙыусылар, уҡытыусылар алдырамы икән үҙҙәренә тәғәйенләнгән гәзит-журналдарҙы? Бәғерҙәренә үтерлек итеп, "Оят түгелме? Ул баҫмалар һинең, минең өсөн сығарыла, күп ауырлыҡтар аша яулап алынған бит улар", - тип әйтке килә ундайҙарға.

**Роза САҘРЕТДИНОВА.**
**Мәләүез районы Һарыш ауылы.**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Илебеҙҙә тотош бер нисә быуын пионерҙар ойошмаһы йоғонтоһонда тәрбиәләнде. Бөгөнгө балалар һәм үсмерҙәр өсөн дә шуға оҡшаш берәй тәрбиә мәктәбе кәрәкме?

**(Башы 1-се биттә).**

**Айгөл МӨХӘМӘТЙӘНОВА, БДУ студенты:** Мәктәпте тамамлап сығыуыма бер йыл тула, ләкин миндә ун йыл буйы көн дә унын юлын тапаған, белем алған был уҡыу йортон юҡһыныу тойғоһо юҡ. Ни өсөнмө? Үҙем дә аптырайым һәм быға яуап эҙләйем. Эш, моғайын, шундалыр тип уйлайым: мәктәптә ниндәйҙер кимәлдә белем бирәләр, ә уҡыусының күңел донъяһы, хис-тойғолары менән менән берәү ҙә ҡыҙыҡһынмай. Һәр бала үҙ донъяһына бикләнгән. Уҡытыусы дәрес бирә лә, өйөнә ашыға, ә директор ҡыҙҙарҙың дәрескә ни өсөн итәк урынына салбар кейеп килеүен тикшереп йөрөүҙән бушамай - бөтә тәрбиә бына шул тирәлә урала. Уҡыу йылы башында мәктәптең уҡыусыларҙан торған үҙидара органы һайлап ҡуйыла ла, шуның менән эш тә бөтә. Бер ниндәй иҫтә ҡалырлыҡ ойоштороу эштәре, мәҙәни саралар хәтерҙә ҡалмаған. Әсәйемдең мәктәптә уҡыған йылдарҙағы хәтирәләренән пионерҙар һәм комсомолдарҙың белем алыуҙы йәмәғәт эштәре менән яраштырып алып барыуҙары, төрлө ҡыҙыҡлы осрашыуҙар үткәреүҙәре, тимурсылар командаһы ойоштороп, өлкән йәштәгеләргә ярҙам итеүе, походтарға йөрөүе, өлгәшмәгән йә тәртип боҙғандарҙы сбор үткәреп, тетмәһен тетеүҙәре, ундайҙарға ыңғай йоғонто яһарға тырышыуы һәм, ғөмүмән, бик матур, күңелле йәшәүҙәре хаҡында беләм инем. Берҙән, беҙҙең заманға тиклем шул ойошмаларҙың юҡҡа сығыуы бик йәл булһа ла, бер кешеләй булырға өндәп ("Как все" тигән сатирик йыр ҙа бар бит ул турала), бөтәһен бер ҡалыпҡа буйһондорорға тырышыуҙар хәҙерге үсмерҙәргә оҡшап етер инеме икән, тип тә уйлап ҡуям. Диктат, бөтәһенә лә бер төрлө эшләү һәм уйлау кәрәклеге, бөтәһе өсөн бер төрлө тәртип ҡағиҙәләре, минеңсә, кешенең аң даирәһен , фантазияһын һәм, әлбиттә, хоҡуҡтарын сикләйҙер, тип уйлайым мин. Икенсе яҡтан, әйтеүемсә, үсмерҙәрҙе урамда, аулаҡ подъездарҙа, ҡыйыҡ баштарында "тәжрибәләр " үткәреүҙән йолоп, уларҙы балалар ойошмаһы эшенә йәлеп итеү бер ҙә насар булмаҫ ине. Иң мөһиме, уларҙың башын, аңын, күңелен файҙалы нәмәләр менән тултырыу, мәшғүл итеү кәрәк. Ошо йәһәттән ниндәйҙер сәйәсиләштерелгән балалар ойошмаһы булмаһа ла, һәләттәре буйынса үсмерҙәрҙе төрлө түңәрәктәргә, секцияларға кире ҡайтарыу кәрәктер, бәлки? Мәҫәлән, малайҙарҙы "Йәш конструктор", "Авиамоделист" йәки спорт секциялары бик йәлеп итер ине. Мин үҙем, мәҫәлән, фоторәссам түңәрәгенә, бассейнға, фитнес-үҙәккә йөрөр инем, тик улар бөтәһе лә түләүле. Мәктәп уҡыусылары һәм студенттар өсөн бушлай түңәрәктәр, секциялар ойоштороуы бик ҡиммәткә төшәме икән ни дәүләтебеҙгә? Һәләте булып та уны артабан үҫтереүгә матди мөмкинлеге сикләнгән йәш быуын вәкилдәренең юҡҡа сығыуы дәүләтебеҙ өсөн генә түгел, бөтә кешелек өсөн ысынлап та ҡиммәткә төшөүе ихтимал бит, юғиһә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БАШ ЙОРТТА...

# МИЛЛИ ЙӨҘӨ...

## туған телдә һөйләшеү ҙә булдыра



**Баш ҡалабыҙҙың иҫтәлекле урындары күп, әммә минең өсөн иң яратҡан урын Салауат Юлаев һәйкәле булып ҡала. Күңел гел шунда тартып тора. Бигерәк тә яҙ көндәрендә ғаилә менән йыш барабыҙ. Унда Салауат рухы йәшәй кеүек.**

Һуңғы йылдарҙа һәйкәл тирәһе күркәмләнде. Тирмәгә инеп, милли аш-һыуҙарыбыҙҙан ауыҙ итеп ҡайтыу үҙе бер кинәнес. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың бөйөк улдары менән бәйле урындарҙың барыһы ла ҡәҙерле. Батырҙарыбыҙ, арҙаҡлы шәхестәребеҙ яҡын кешеләребеҙ кеүек йөрәк түрендә йәшәй. Хатта мәсеткә барғанда, туғандарым исеменә генә түгел, Салауат, Урал батыр рухтарына хәйер биреп китәм.

Үҙем Калинин районында, Инорс биҫтәһендә йәшәйем. Ул яҡ эшселәр районы һанала, матур, иҫтәлекле урындар юҡ тиерлек. Шулай ҙа беҙгә Ләлә-Тюльпан мәсете яҡын. Һөнәрем буйынса - башҡорт теле уҡытыусыһымын. Техник колледжыбыҙҙа белем алған балаларҙы шул мәсеткә йыш йөрөтәм. Тәрбиә эшемдә ул урын бик ныҡ ярҙам итә. Мәсеткә, ғәҙәттә, намаҙ ваҡытына барабыҙ. Балалар тәһәрәт алып, намаҙ уҡый, аҙаҡтан мулланың вәғәздәрен тыңлайҙар. Мәсеттә булғандан һуң ҡайһы бер уҡыусылар һуңынан үҙҙәре намаҙға баҫа. Мәсет эргәһендә урынлашҡан Хәрби дан музейына ла инәбеҙ. Илһөйәр шәхесебеҙ Илдар Шәйәхмәтовтың һөйләгәндәрен балалар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңлай.

Орджоникидзе майҙанындағы ике һигеҙ ҡатлы йорт үҙенә күрә бер тарихи ҡомартҡы булып тора. Уларҙы әсиргә алынған немец хәрбиҙәре төҙөгән. Йорттар зауыҡлы ла, ныҡлы итеп тә һалынған.

Һанай китһәң, ҡалала тарихи урындар бик күп. Тик күбеһен йәштәребеҙ белеп етмәй. Әйтәйек, беҙҙең районда Ферин урамы бар. Михаил Ферин - Социалистик Хеҙмәт Геройы, ваҡытында Өфө моторҙар төҙөү заводы директоры була. Унан һуң заводты Василий Баландин етәкләй. Шулай уҡ урамдарҙың береһе уның исемен йөрөтә.

Әммә биналар, урамдар Өфөнөң милли йөҙөн сағылдырып етмәй, минеңсә. Биналарға үҙебеҙҙең милли орнаменттарҙы төшөрөр инем, мәҫәлән. Был йәһәттән Өфөнө һәр ваҡыт Ҡаҙан менән сағыштыралар. Күрше республиканың баш ҡалаһын күреп ҡайтыусылар, ғәҙәттә, Ҡаҙан матурыраҡ, ти. Быны бигерәк тә балаларҙан ишетергә тура килә. Ә бит, хәҡиҡәт балалар теле менән әйтелә, тигән әйтем бар. Ысынлап та, Ҡаҙанда милли архитектура ҡомартҡылары күп. Унан да бигерәк, халыҡ үҙ-үҙен тотошо менән дә ҡалаһының милли йөҙөн булдыра. Унда ҡайҙа барма, татар теле яңғырап тора. Беҙҙә бит улай түгел. Хатта "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы закон талаптары ла үтәлмәй. Йәмәғәт транспортының күбеһендә туҡталыштар исеме башҡортса иғлан ителмәй. Алтаҡталарҙа хаталы яҙыуҙар тулып ята. Өҫтән, етәкселәр тарафынан ҡаты күҙәтеү, талап юҡ, тип иҫәпләйем мин.

**Фәнилә ӘМИНЕВА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотоп ҡуймағыҙ.**




Кем **"Киске Өфө"**гә май айында яҙылған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәреп, бәхетен һынап ҡараһын: **3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына, 3 кеше Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" тигән китабына эйә буласаҡ.**

● Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе** лә хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атаәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **234 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. 2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөгә "Ҙур химия" халыҡ-ара форумында ҡатнашыу өсөн килгән Швейцария Конфедерацияһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Пьер Хельг менән осрашты. Осрашыуҙа, Швейцария менән Башҡортостан араһында юғары кимәлдә хеҙмәттәшлек булдырылған, шул уҡ мәлдә беҙҙең республика уны күп өлкәләрҙә киңәйтергә ниәтләй, тип билдәләнгән. 2011 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан менән Швейцарияның тышҡы тауар әйләнеше 102 млн АҠШ долларынан ашып киткән. Республиканың тышҡы тауар әйләнешенең дөйөм күләмендә Швейцария 22-се урын биләй. Башҡортостанда Швейцария капиталы ҡатнашлығында ойошторолған дүрт предприятие эшләй.

✓Өфөлә гидротехник ҡоролмалар етештереү буйынса завод төҙөлә башланы. Был Башҡортостандағы энергияны һөҙөмтәле файҙаланыу технологиялары технопаркының тәүге предприятиеһы. Предприятиеға нигеҙ ташы һалыу тантанаһында Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Игорь Сечин, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, "РусГидро" идараһы рәйесе Евгений Дод һәм "Альстом" компанияһының яңынан тергеҙелә торған энергетика секторы президенты Жером Пекресс ҡатнашты. Яңы завод бәләкәй һәм урта гидроэлектростанциялар өсөн ҡорамалдар етештерәсәк. 2014 йылда беренсе продукция сығарыласаҡ, ә 2016 йылда предприятие тулы ҡеүәтенә эшләй башлаясаҡ, тип көтөлә.

✓20 майҙа Өфөнөң Конгресс-холында "Айыҡ ауыл - 2011" республика конкурсының йомғаҡлау тантанаһы үтә. Сараны ойоштороусылар - республика Хөкүмәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте. Тантаналы сара барышында конкурста ҡатнашыусы иң яҡшы ауыл биләмәләре, журналистар, муниципалитеттар, активистар билдәләнәсәк. Гала-концертта "Айыҡ ауыл-2012" конкурсына старт биреләсәк. Программаны популяр башҡарыусылар - Роберт Юлдашев, Дмитрий Баринов, Ян Лира, "Арғымаҡ" һәм "Ирәндек" ансамблдәренең сығыштары биҙәйәсәк. Сара сиктәрендә конкурсты ойоштороусылар һәм еңеүселәр менән 14 сәғәттә матбуғат конференцияһы үткәреләсәк, тантаналы сара 15 сәғәттә башлана.

✓ *Хәҙер инде Лев Толстойҙың башҡорттарға барған саҡтағы кәйефе менән ҡайтҡан саҡтағыһы араһындағы айырмаға иғтибар итегеҙ. Башҡорттар араһында булыу Лев Толстойҙы үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙан аралап ҡалған.*



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

**Йөкмәткеһенә һалынған мәғәнәһенән күренеүенсә, донъяның фанилығы, ғүмерҙең күҙ йомоп асҡан арауығына тиң ҡыҫҡалығы хаҡында был әйтем. Шуға күрә донъяның халҡыбыҙ тарафынан тораҡтарҙың иң ябайына һәм ваҡытлысаһына - бесән ҡыуышына тиңләнеүе һис тә ғәжәп түгелдер. Икенсе яҡтан ҡарағанда, көноҙоно ҡолас киреп бесән сапҡандан һуң хуш еҫле бесән, сәскә еҫтәренә иҫереп, бесән ҡыуышында йоҡламаған кеше генә былдай рәхәтлектең ни икәнен белмәйҙер. Тимәк, был әйтемгә бесән ҡыуышының ябай һәм ваҡытлыса тораҡ булыуынан тыш, тағы ла тәрәнерәк мәғәнә һалынған.**

# БЫЛ ДОНЪЯ - БЕСӘН ҠЫУЫШЫ...



Халҡыбыҙ йырҙарының ҡайһыһын ғына алып ҡарамайыҡ, барыһында ла тиерлек сағылыш таба донъяның сәхрәләге бесән ҡыуышына, тирмә күркәмлегенә тиң хозурлығы, ғүмерҙең һәр төрлө сағыштырыуҙарға тиңһеҙ ҡәҙере, фанилығы. Миҫалға "Юрмый буйы" йырының һүҙҙәрен генә килтерәйек:

*Йыраҡтарҙан ағарып,*
*ай, күренә*
*Башҡорттарҙың*
*тирмә өйҙәре.*
*Йыраҡтарҙан моңайып,*
*ай, ишетелә*
*Башҡорттарҙың*
*тирмә көйҙәре.*
*Аҡ ҡуяндар кеүек*
*ҡуш-ҡуш баҫып,*
*Эҙгенәйҙәр ҡалһын был ерҙә.*
*Һандуғастар булып*
*һайрашайыҡ,*
*Һүҙгенәйҙәр ҡалһын*
*был ерҙә.*

Йә булмаһа, бик һирәк башҡарылған "Шешәнәкәй буйы" йырының һүҙҙәрен иҫкә төшөрәйек:

*Шешәнәкәй буйы*
*ҡыҙыл ҡырсын,*
*Ҡыҙыл ҡырсындарҙы*
*ҡыҙырҙым.*
*Уҙып ҡына барған*
*был ғүмерҙең*
*Алдарына сығып һыҙғырҙым.*
*Бара ғына торғас,*
*ай, ултырҙым,*
*Аяҡтарым талып та*
*барғанға*
*Ултырып та тороп,*
*бер йырланым,*
*Йөрәктәрем янып та*
*барғанға.*

Шундай хозурлыҡҡа шаһит булып, фани ғына ғүмерҙең аяуһыҙ үтеүҙәренә сыҙай алмайынса, үҙ ғүмеренән алдарына сығып: "Үтмәй тор, ғүмерем, мин әле ошо хозурлыҡҡа һоҡланып туйманым, танһыҡтарым ҡанманы әле!" - тип һыҙғырыу ғына түгел, әллә нимәләр эшләрһең, иларһың, йырларһың, көлөрһөң, үкенерһең...

Элек-электән башҡорттар төйәк иткән Уралтауҙың тәбиғәтенә генә түгел, ҡая-урмандар ипкенлегендә, дала-яландар иркенлегендә ике ҡитғаны бер итеп азат тормош менән йәшәүсе халҡыбыҙҙың күңел донъяһына ситтән килеп һоҡланыусылар ҙа күп булған. Шундай шәхестәрҙең береһе мәшһүр (бөйөк түгел, Аллаһ ҡына бөйөк) урыҫ яҙыусыһы, данлыҡлы аҡыл эйәһе Лев Николаевич Толстой булған. Яҙыусы ижадының, улай ғына ла түгел, күңел биографияһының ҙур өлөшө башҡорттар менән бәйле.

"Башҡорттарҙан Геродот еҫе аңҡый" тигән Лев Толстой. Ошо һүҙҙәрҙе яҙғанда ниндәй уй-тойғолар солғанышында йәшәгән һуң яҙыусы? Дөрөҫөрәге, уны тәүге тапҡыр башҡорттар йәшәгән Һамар губернаһының Кәрәлек буйына килергә нимә мәжбүр иткән? Яҙыусының тәржемәи хәле хаҡындағы төрлө сығанаҡтарҙа шул асыҡлана. Толстой ағаһы үлгәндән һуң 1862 йылдың 14 майында хеҙмәтсеһе Алексей Орехов һәм Ясная Поляналағы ике шәкерте Егор Чернов, Василий Морозов менән Һамар губернаһының Кәрәлек буйы башҡорттарына ҡымыҙ эсергә килә һәм унда 31 июлгә тиклем була. Йәғни, яҙыусының башҡорттар араһына килеүе ағаһы үлгәндән һуң ҡаҡшаған һаулығын нығытыу маҡсатында ҡымыҙ эсеүгә, дала һауаһы һулауға ғына ҡайтып ҡалған кеүек.

Хәҙер инде Лев Толстойҙың ниндәй кисерештәр, уй-тойғолар шауҡымында Кәрәлек буйына килеүен яҙыусының шул осорға бәйле яҙмаларына таянып асыҡлап ҡарайыҡ. Бының өсөн уның "Тәүбә итеү" ("Исповедь") тип аталған уйланыуҙарына туҡталып, уның шул осор кисерештәрен күҙ алдына килтерәйек. Яҙмала ниндәй уйланыуҙар шауҡымы уны башҡорттар араһына килтереүе аныҡ әйтелә. Әҫәрҙең күләме бик ҙур, шуға күрә мин яҙыусының ундағы ҡайһы бер фекерҙәренә генә туҡталам:

"...элекке кеүек, хәҙер ҙә православие динен таныусылар һәм ғибәҙәт ҡылыусылар араһында тупаҫ, рәхимһеҙ һәм әхлаҡһыҙ һәм үҙҙәрен бик мөһим һанағандар күберәк осрай. Ә үҙҙәрен динһеҙ тип һанаусылар араһында рәхимле аңлылар, намыҫлылар, эскерһеҙҙәр һәм изге күңеллеләр күберәк..."

"...ул йылдарҙы (рус армияһы сафында хеҙмәт иткән йылдарын күҙ уңында тота - **Ә.Ғ.-Ү.**) ҡотом осоп, ерәнеп һәм йөрәгем һыҙлап иҫкә төшөрәм. Мин кешеләрҙе һуғышта, дуэлгә саҡырып үлтерҙем, кәрттә отолоп та уларҙың йәнен ҡыйҙым, мужиктарҙың елкәһендә көн күрҙем, үҙҙәрен үлтерҙем, фәхишәлек ҡылдым, алдаштым. Ялғанлыҡ, уғрылыҡ, аҙғынлыҡтың ниндәй генәһен ҡылманым, эскелек, көсләү, үлтереү... Мин ҡылмаған енәйәт тә ҡалмағандыр һәм бының өсөн мине һәр ваҡыт маҡтанылар, тиҫтерҙәрем мине сағыштырмаса әхлаҡлы кешегә һананы. Ун йыл ғүмерем шулай үтте..."

"...тормошом туҡтап ҡалды. Мин һулыш алам, ашайым, эсәм, йоҡлайым, сөнки һулыш алмайынса, ашамайынса, эсмәйенсә, йоҡламайынса булдыра алмайым: әммә минең өсөн тормош юҡ, сөнки тормошҡа ашырырлыҡ теләктәремде мөһим тип һанамайым..."

"...мин, нисектер, йәшәй-йәшәй, алға бара-бара упҡын ситенә килеп баҫтым һәм алдымда үлемдән башҡа нәмәне күрмәйем. Туҡтарға ла ярамай, артҡа ла китеп булмай, алдымда ялғандан башҡа бер нәмә лә булмағанын күрмәҫ өсөн күҙҙе йоморға ла ярамай, алдымда хатта бәхет тә, ысын ғазап та, ысын үлем дә юҡ...."

"...ошо ҡотһоҙлоҡтан ҡотолор өсөн мин үҙемде үлтерергә теләйем. Үҙемде нисек үлтереремде күҙ алдыма килтерәм дә, быны үҙемдең әлеге хәлемдән дә ҡот осҡосораҡ икәнлеген аңлап, туҡталып ҡалам, әммә үҙ үлемем менән үлеремде көтөргә сабырлығым етмәҫен тоям. Йөрәгем йә башҡа ағзам шартлағандан һуң барыһы ла тамамланыры хаҡындағы уй йөрөтөүем нисек кенә ышандырырлыҡ булмаһын, мин барыбер үҙ үлемем менән донъянан китеремде сабыр ғына көтөп ала алмаҫмын кеүек. Үлем ҡараңғылығынан ҡурҡыу миндә шул тиклем көслө, шуға күрә бау йәки пуля ярҙамында унан тиҙерәк-тиҙерәк ҡотолғом килә. Ошо тойғо мине үҙ-үҙемә ҡул һалырға нығыраҡ этәрә..."

"...йыл һуҙымында мәктәп һәм журнал араһын тоташтырыусы булып эшләнем һәм был эшемдән бик яфаландым. Ни өсөн тигәндә, икеһенең араһында бәрелә-һуғыла буталып бөттөм: мәктәптәге эшмәкәрлегем күңел тыныслығымды юйһа, журналдағы урыҡ-һурыҡлыҡтан үҙемдең дә ҡосҡом килде. Барыһын да нимәгәлер өйрәтергә теләү һәм үҙем белмәгәнде уҡытырға теләүемде йәшерергә тырышыу тәнемде генә түгел, йәнемде лә сиргә һабыштырҙы һәм барыһын да күтәреп һуҡтым да, саф һауа һуларға, ҡымыҙ эсергә һәм тәбиғи тормош менән йәшәргә далаға - башҡорттарға юлландым..."

Толстойҙың Кәрәлек буйына ошо барғанында хеҙмәтсеһе һәм ике шәкерте менән нимәләр эшләгәне, башҡорттар менән нисек аралашыуы хаҡында бик күп сығанаҡтарҙа бәйән ителә. Хәҙер инде һүҙҙе Толстойҙың үҙенә биреп, "Тәүбә итеү" яҙмаһына күҙ һалайыҡ:

"...унан (башҡорттар араһынан - **Ә.Ғ.-Ү.**) әйләнеп ҡайтҡандан һуң, өйләндем. Бәхетле ғаилә тормошонон яңы шарттары мине һәр төрлө йәшәү мәғәнәһе эҙләүҙән бөтөнләй ситләштерҙе. Ул ваҡытта мин бар тырышлығымды ғаиләмә, ҡатыныма, балаларыма һәм йәшәү сығанағын арттырыуға бағышланым. Камиллашыуға ынтылыуым хәҙер инде, ғөмүмән, прогресҡа табан камиллашыуға ынтылыуҙан ғәйре ғаиләмдә үҙемде яҡшыраҡ тойоуға ынтылыу менән алмашынды. Ошо шарттарҙа тағы ла ун биш йыл ғүмерем үтеп китте..."

Хәҙер инде Лев Толстойҙың башҡорттарға барған саҡтағы кәйефе менән ҡайтҡан саҡтағыһы араһындағы айырмаға иғтибар итегеҙ. Дөрөҫ уйлайһығыҙ: башҡорттар араһында булыу Лев Толстойҙы үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙан аралап ҡалған.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы киләһе һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Милли музейында "1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусы башҡорт яугирҙарының шәжәрәләре" күргәҙмәһе асылды. Республиканың Милли музейы вәкилдәре хәбәр итеүенсә, экспозиция 1812 йылғы Ватан һуғышына 200 йыл тулыуға арнала. XIX быуат башында башҡорт яугирҙары даны бөтә Европаға тарала, французлар уларҙы "Төньяҡ амурҙары" тип атай. Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт яугирҙары Парижға барып етә. Күргәҙмәлә Бүздәк, Краснокама, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Ишембай, Көйөргәҙе, Әбйәлил, Дәүләкән, Балаҡатай, Асҡын, Белорет, Ҡариҙел райондары, Салауат һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары яугирҙарының 15 шәжәрәһе тәҡдим ителә. Күргәҙмә 30 майға тиклем эшләйәсәк.

✓БР Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Ильяс Мөниров Башҡортостандағы иң насар юлдарҙы билдәләп үтте. Улар: Өфө-Инйәр-Белорет, Учалы-Мейәс һәм Борай-Иҫке Балтас-Тәтешле-Ҡояҙы йүнәлештәре. Киләсәктә был участкаларҙа ремонт эштәренең өҫтөнлөклө тәртиптә алып барыласағы билдәләнде. Әммә Учалы-Мейәс юлы менән кем шөғөлләнере әлегә билдәле түгел. Комитет рәйесе әйтеүенсә, конкурста еңгән подряд ойошмаһы эштәрҙән баш тартҡан, шуға күрә был участканы яңынан аукционға ҡуйырға тура киләсәк. Хәүефле боролошо менән насар дан алған Өфө-Инйәр-Белорет йүнәлешенә килгәндә иһә, боролошҡа тиклем ремонт эштәре быйыл уҡ тамамланасаҡ.

✓Өфөлә Фәйзи Ғәскәров исемендәге призға VI Төбәк-ара халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре фестивале бара. Сара танылған бейеүсенең тыуыуына 100 йыл тулыуға арнала. Быйыл Өфө сәхнәһендә Башҡортостан, Татарстан һәм Төмән өлкәһенән 27 үҙешмәкәр коллектив сығыш яһай. Фестивалде асыу тантанаһы һәм конкурс һынауҙары - М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында, ә гала-концерт һәм еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы 20 майҙа 15 сәғәттә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында үтә.

✓Октябрьский ҡалаһында XII Республика ҡурай байрамы бара. Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Октябрьский ҡалаһы округы хакимиәте һәм республиканың Ҡурайсылар союзы ойошторған ҡурай байрамы быйыл билдәле йырсы, фольклор йыйыусы һәм ҡурай буйынса тәүге профессиональ педагог Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арнала.

**"Башинформ"дан.**

## ЕТЕ РАЙОН

**Дим.** Район хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссия ултырышы үтте. Унда тәрлә структура подразделениелары етәкселәренең алтаҡталарҙағы, предприятиеларҙың, ойошмаларҙың эш ваҡыты яҙылышындағы хаталарҙы төҙәтеү буйынса отчеттары тыңланды. Хаталар Комиссияның күсмә тикшереүҙәре барышында асыҡланған.

**Калинин.** "УМПО" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең Н. Гастелло исемендәге спорт клубында коляскаларҙа хәрәкәт итеүсе инвалидтар араһында БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың беренсе саҡырылыш депутаты В. Л. Кашулинский иҫтәлегенә арналған ҙур теннис буйынса турнир үтте.

**Киров.** Республикала Польша мәҙәниәте көндәре уҙҙы. Уны асыуҙа райондың А. Пенькевич исемендәге Поляк милли йәкшәмбе мәктәбе уҡыусылары сығыш яһаны. Сара сиктәрендә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт педагогия университетында поляк теле һәм әҙәбиәте кабинеты асылды. Шулай уҡ вуз менән Олецко ҡалаһы араһында хеҙмәттәшлекте үҫтереү мәсьәләләре буйынса "түңәрәк ҡор" уҙғарылды.

**Ленин.** Традицияға әйләнгән "Призывник көнө" әрме сафына әҙерләнеүселәрҙе генә түгел, райондың дөйөм белем биреү мәктәптәренең өлкән синыф уҡыусыларын, һөнәрселек училищелары студенттарын, үҫмерҙәр клубтарында шөғөлләнеүселәрҙе, кадеттарҙы йыйҙы. Егеттәр алдында хакимиәт, комиссариат вәкилдәре, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары сығыш яһап, үҙҙәренең теләктәрен еткерҙе, фатихаһын бирҙе. Әрме сафына саҡырылыусыларға бүләктәр тапшырылды. Сара "Танкист", "Аҡ юлбарыҫ" фильмдарын ҡарау менән тамамланды.

**Октябрь.** Башҡортостан баш ҡалаһының иң йәш районы үҙенең 35 йыллығын билдәләне. Был көндә райондың хеҙмәт алдынғылары Башҡортостан Республикаһының Маҡтау ҡағыҙҙарына, юғары исемдәргә лайыҡ булды. Тарих өсөн ҡыҫҡа ғына булып тойолған ваҡыт эсендә райондың иҡтисади һәм социаль үҫеше өсөн бик күп эшләнелгән, һәм былар барыһы ла эшһөйәр халыҡтың тырыш хеҙмәт ҡаҙанышы.

**Орджоникидзе.** Нестеров исемендәге музей филиалында "Ижад" күргәҙмәләр залының 10 йыллығына арналған юбилей күргәҙмәһе асылды. Унда Башҡортостандың билдәле рәссамдарының эштәре ҡуйылды.

**Совет.** И. Якутов исемендәге паркта балаларҙы яҡлау көнөнә арналған "Баласаҡтың мөғжизәле донъяһы" тип аталған байрам үтте. Сарала төрлө уйындар, конкурстар, эстафеталар менән бер рәттән, төрлө сувенирҙар эшләү буйынса мастер-кластар ҙа ойошторолдо.

## ТУҠТА, МӘЛ!

**Ошо көндәрҙә республика райондарында Халыҡ-ара ғаилә көнөнә арнап та, быйылғы йылдың республикала Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы икәнен күҙҙә тотоп та, матур саралар үтте. Бөрйән районында үткән байрамда беҙгә лә ҡатнашырға, ундағы кешеләрҙе, сығыштарҙы фотоһүрәттәрҙә һынландырырға насип булды.**

# АУЫЛДА - БАЙРАМ,

## йәки Бөрйән ҡарттарының йәшәргәне











Филүс ШАКИРОВ фотолары.

Бөрйәндә байрам уйлап табырға оҫта халыҡ йәшәй, сөнки ул сараларҙы һынландырыр, тормошҡа ашырыр таланттар ҙа, уларҙы ойошторор дәртле, битарафлыҡтан азат белгестәр ҙә етерлек бында. Был юлы иһә район ауылдарында ай буйы "Йәш беҙҙең күңелдәр" тигән халыҡ ижады фестивале барған, унда 520 кеше ҡатнашҡан, бер меңләп кеше тамаша ҡылған. Фестивалдең район үҙәгендә үткән йомғаҡлау кисәһендә шул фестивалдең еңеүселәре - 203 кеше сығыш яһаны. Байрам ура тайындағы оло быуын вәкилдәре йәшлектәрендәге йырбейеүҙәрҙе башҡарҙы, киске һәм аулаҡтарҙағы уйындарҙы, ҡара-ҡаршы әйтештәрҙе, йолаларҙы һынландырҙы. Уларҙың музейҙарҙа йә һандыҡтарҙа һаҡланған түгел, ә һәр ырыу- араға хас элементтар, орнаменттар менән үҙҙәре теккән һәм тектергән өр-яңы башҡорт милли кейемдәрҙә сығыш яһауы шулай уҡ иғтибарға һәм маҡтауға лайыҡ күренеш булды.

Сәхнә түрендәге ошо инәйҙәр һәм бабайҙар, апайҙар һәм ағайҙарҙың йөҙҙәре нурланыуына, балаларса шатланыуына шаһит булынды был кисәлә. Унда ҡатнашыусыларҙың иң өлкәне Нәғимә Сәйәхова инәйгә 88 йәш, тинеләр. Был һоҡланғыс тамашаны уйлап табыусылар Хоҙай рәхмәтендә булһын ине.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ауылдарҙа тағы ҡайҙа шулай байрам итә беләләр? Гәзитебеҙҙәге "Ауылда - байрам" тигән рубрикаға һеҙҙең төбәктәрҙә үткән байрамдарҙан фотоһүрәттәр һәм шуға ҡушып бәләкәй генә хәбәр көтәбеҙ.**

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЭТТЕҢ ҠАЙҺЫҺЫ ХӘҮЕФҺЕҘ,

## шуны ғына аҫра

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай депутаттары йорт хайуандары аҫрау ҡағиҙәләренә талаптарҙы арттырырға уйлай.**

Ошо арала ҡаралған "Йорт хайуандары тураһында"ғы законға ярашлы, кеше һаулығына хәүеф килтерерҙәй тоҡомло эттәрҙе ҡала урамында балиғ булған кешеләр, моронҙоҡ кейҙереп, муйынса тағып, бауҙан ыскындырмайынса ғына йөрөтөргә мөмкин. Икенән артыҡ этте йөрөтөргә рөхсәт ителмәй. "Йорт хайуандары тураһында"ғы республика законына хәүеф тыуҙырырлыҡ тоҡомло эттәр исемлегенә Америка питбультерьеры, Көньяҡ Африка бурбуле, Карелия айыу эте, Анатолий карабашы, Америка стафордширд терьеры, Кавказ овчаркаһы, алабай һәм ошо тоҡомдарҙан барлыҡҡа килгән метис эттәр ингән. Был тоҡом эттәрен хайуандарҙы тәрбиәләүҙә тәжрибәһе булмағандарға һатып алырға рөхсәт итеү ҙә хәүефле, тип билдәләй закон авторҙары. Шулай уҡ баш ҡалала эттәр өсөн махсус йөрөтөү урындары булмауы ла яҡшы түгел. Бынан тыш, граждандарға, йәмәғәт ойошмаларына күп фатирлы йорттарҙа иҫәпһеҙ эт һәм бесәй аҫраусыларҙы контролдә тотоу һәм уларға ҡарата ялыу яҙыу хоҡуғы биреләсәк. Йорт хайуандары тәрбиәләргә яратыусыларға ниндәй яза бирелере айырым документта аныҡ яҙыласаҡ. Был, моғайын, штраф рәүешендә булыр. "Йорт хайуандары тураһында"ғы закон май аҙаҡтарында ҡабул ителер, тип көтөлә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Рәсәйҙең 1812 йылдағы Ватан һуғышында еңеүенә 200 йыл тулыуға арналған "Алтын тирмә" төбәк-ара милли театрҙар фестивалененә аҙаҡҡы туры Башҡортостандың Стәрлебаш районында үтте. Республиканың театр коллективтары менән бер рәттән, фестивалдә Татарстан, Дағстан, Хакасия һәм Силәбе өлкәһе коллективтары сығыш яһаны.

✓Төбәктең Яҙыусылар союзы идараһы ултырышында Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзының Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге премияһы булдырылды. Был тәҡдимде ижади берләшмә идараһының барлыҡ ағзалары ла хупланы. Яңы әҙәби премияның концепцияһын әҙерләү өсөн махсус комиссия булдырылды, уның етәксеһе итеп билдәле шағир, филология фәндәре докторы, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Рәшит Шәкүр тәғәйенләнде.

✓Сибай ҡалаһында "Сибай үлемесле тәмәке фабрикаһын төҙөүгә ҡаршы" исемле велоуҙыш үтте. Акцияла студенттар, эшҡыуарҙар, экологтар, эшселәр һәм медицина хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Тәмәке фабрикаһын төҙөү хәүефе янағанлыҡтан, Сибайҙа алкоголизм, наркомания һәм тәмәке тартыуға ҡаршы көрәш буйынса Владимир Путиндың тәмәкегә ҡаршы концепцияһына ярҙам итеү комитеты булдырылды.

✓Башҡорт дәүләт университеты ғалимдары менән эшләп сығарылған "Нәҫелдән килгән соматик ауырыуҙар өсөн тест-система булдырыу" проекты "Киләсәк медицинаһы" йүнәлеше буйынса "СТАРТ - 2012" программаһының бөтә Рәсәй конкурсында еңеүселәр иҫәбенә инде. Тикшеренеү авторҙары - БашДУның генетика һәм фундаменталь медицина кафедраһы мөдире, биология фәндәре докторы Эльза Хөснөтдинова һәм БашДУ ҡарамағындағы "Академик инновацион технологиялар" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте ("АИТ" йәмғиәте) бәләкәй инновацион предприятиеһы директоры Георгий Брон.

✓Июндә рәсәйлеләргә тағы алты көнләк эш аҙнаһы көтә. РФ Хеҙмәт кодексының 112-се статьяһына ярашлы, 12 июнь - Рәсәй көнө - ял һәм байрам көнө булып тора. Хеҙмәткәрҙәр ял һәм байрам көндәрен рациональ файҙаланһын өсөн 9 июндәге, шәмбеләге ял көнө дүшәмбегә, 11 июнгә, күсерелгән. Шулай итеп, Башҡортостан Республикаһында байрам сәбәпле 10, 11 һәм 12 июнь ял көндәре буласаҡ.

ҮӘТ, МӘСЬӘЛӘ!

# ХӨКҮМӘТ ЯРҘАМ ИТӘ...

## йәштәр баш тарта



**Белорет районына бөгөн 136 медицина белгесе талап ителә. Был хәл, йәғни табиптар етешмәүе халыҡ араһында ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Сөнки был дауаханаларҙа оҙон сираттар хасил булыуына, ауырыуҙарға тейешле иғтибар етешмәүенә килтерә. Кадрҙарға ҡытлыҡ айырым врачтарҙы ла үҙ йүнәлешенән ситләшеп, башҡа белгестәр өсөн эшләргә мәжбүр итә. Юғары белемле йәш белгестәрҙе ауыл медицина учреждениеларына эшкә ҡайтарыу ҙа еңел булмаған мәсьәләләрҙең береһе һәм уны дәүләт ярҙамынан тыш хәл итеү мөмкин булмаған эш. Ошоно күҙ уңында тотоп ҡабул ителгәндәр ҙә инде Рәсәй Хөкүмәтенең "Земство врачы" программаһы.**

Программаның төп маҡсаты - медицина буйынса юғары белем алған йәштәрҙе ауыл ерҙәрендә эшләргә йәлеп итеү. Был программала ҡатнашыусыларға федераль бюджеттан 1 млн., республика бюджетынан 100 мең һум аҡса бүленә. Әлбиттә, программала ҡатнашыуҙың, был аҡсаға эйә булыуҙың айырым талаптары ла бар. Унда 3 йыл стажы булған, 35 йәште үтмәгән һәм ауыл ерендә биш йыл эшләргә теләк белдергән йәш белгестәр ҡатнаша ала. Әгәр ҙә был категорияға инеүселәр ирле-ҡатынлы икән, уларҙың һәр береһенә ошо сумма ҡаралған һәм улар бүленгән сумманы үҙ белдеге менән тотона ала.

Беҙҙең Белорет районынан ундан ашыу егет һәм ҡыҙ Башҡорт дәүләт медицина университетында маҡсатлы юллама буйынса белем ала. Тик шуныһы: ҙур сығымдар һалып, маҡсатлы юллама буйынса уҡытылған белгестәр төрлө сәбәптәр менән тыуған яҡтарға эшкә ҡайтыуҙан баш тарта. Шунлыҡтан маҡсатлы йүнәлтмә алымы үҙен тулыһынса аҡламай. Берәүҙәр ғаилә хәле буйынса икенсе урынға йәшәргә китһә, икенселәре ҙурыраҡ ҡалаларҙа эшләүҙе өҫтөнөрәк күрә. Шулай уҡ "Земство врачы" программаһын ҡабул итеү ҙә әлегә йәш белгестәрҙе ауылға эшкә ебәреү проблемаһын хәл итер тип ышанып булмай. Мәҫәлән, беҙҙең районға ҡайтҡан белгестәр был программала ҡатнашырға бик үк атлығып тормай булып сыҡты. Программала ҡатнашырға ризалыҡ биргән биш кешенең дүртәүһе кире уйлаған. Ошо программаға ҡарата фекерҙәрен белеү өсөн йәш белгестәрҙең үҙҙәренә һәм Үҙәк район клиник дауаханаһының баш врачы Хәбир Мостафинға мөрәжәғәт иттек.

**Илдар ХИСМӘТУЛЛИН. Сығышы менән Бөрйән районы Иҫке Мөсәт ауылынан. 2010 йылда Башҡорт дәүләт медицина университетының дауалау факультетын тамамлаған. Интернатураны травматология һәм ортопедия буйынса үтә. Уҡыуын тамамлағас, бер аҙ Сибай ҡалаһында нейрохирург булып эшләй, ләкин торлаҡ мәсьәләһе хәл ителмәү сәбәпле, Белоретҡа эшкә килә. Ул "Земство врачы" программаһында ҡатнашыуҙан баш тартҡан.**

- Минеңсә, программа ныҡлап уйланып бөтмәгән. Ул күберәк маҡсатлы юллама буйынса уҡығандар өсөн файҙалылыр, сөнки уларға барыбер ҙә тыуған районына эшкә ҡайтырға тура киләсәк. Һәм уларға бер юлы ике ҡуяндың ҡойроғон тоторға була: матди ярҙам да ала, бурысын да ҡайтара. Программала ҡатнашыу хоҡуғым булһа ла, аҡса өсөн генә ауыл ерена китергә теләгем юҡ. Беренсенән, интернатурала уҡып, спорт травмалары буйынса махсуслаштым. Ауылға эшкә китһәң, алған белемеңде камиллаштырыу мөмкинлеге юғаласаҡ. Ҙур ҡалаларҙа иһә, күнәшләшеү өсөн ҙур тәжрибәле коллегалар ҙа эргәңдә, эшләү өсөн шарттар ҙа, техник база ла яҡшыраҡ. Икенсенән, ауылға эшкә китеү өсөн дөйөм практика табибы һөнәренә эйә булыу мөһим. Алған һөнәрем оҡшай, уның буйынса тағы ла камиллашырға, тәжрибә туплаларға теләйем, ә ауылда нәҡ үҙ һөнәрем буйынса үҫеү мөмкинлеге юғала. Әлбиттә, эш ауыр, ауырыуҙар күп. Мәҫәлән, үткән Яңы йыл байрамында тәүлегенә 52 кеше ҡабул итергә тура килде. Һәр береһенә ярҙам итергә, дауаларға тырышабыҙ. Тик ауырыуҙарҙың мәҙәни кимәленең түбән булыуы күңелде ҡыра.

**Эльвира БАКИРОВА, "Земство врачы" программаһында ҡатнашыусы. Учалы ҡалаһында тыуып үҫкән. Маҡсатлы юллама буйынса БДМУ-ның педиатрия факультетын тамамлаған. Белорет егете менән ғаилә ҡороу сәбәпле, ошонда ҡала балалар поликлиникаһына участка педиатры булып эшкә урынлашҡан. Әлеге ваҡытта хеҙмәт юлын Тирлән участка дауаханаһында дауам итә.**

- Һайлаған һөнәрем буйынса ҡалала ла, ауылда ла эшләргә була. Шуға күрә программала ҡатнашырға һис икеләнеүһеҙ риза булдым. Ауыл ерендә, бәләкәй коллективта үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҙә яҡшыраҡ була. Яңы ғына эшләй башлаған йәштәр өсөн был бигерәк тә файҙалы, сөнки һәр саҡта ла тәжрибәле коллегаларыңдың күҙ уңында булаһың, кәңәштәрҙе лә ваҡытында ишетәһең. Күптәр, ауылда эшләү өсөн шарттар юҡ, тәжрибә туплау өсөн ҙурыраҡ ҡалаларҙа эшләү яҡшы, ти. Минең өсөн, киреһенсә, ҡыйынлыҡтарҙы еңергә, проблемаларҙы үҙ аллы хәл итергә тырышыу үҙе үк юғары һөнәри кимәлгә өйрәтә. Һөнәремдең нескәлектәренә төшөнөп китеү өсөн ҡалағы оло коллегаларым да, бындағылары ла ярҙам итергә әҙер. Программа булған аҡсаға фатир мәсьәләһен хәл итәсәкбеҙ. Ҡала менән Тирлән араһы йыраҡ түгел, шуға күрә йөрөп эшләйәсәкмен. Форсаттан файҙаланып, программала ҡатнашырға кәнәш биргән Үҙәк район клиник дауаханаһының баш врачы Мостафин Хәбир Мөжәүир улына, мине яҡты йөҙ менән ҡаршы алған Тирлән участка дауаханаһы коллективына, уның мөдире Ситдиҡов Кәйүм Мәүлитбай улына ҙур рәхмәтемде белдерәм.

**Хәбир МОСТАФИН, Үҙәк район клиник дауаханаһының баш врачы, медицина фәндәре кандидаты. Йәш медицина белгестәренең хеҙмәт юлын ауылда дауам итеүенә ҡарашын белдереп, ул шулай тине:**

- Бөгөн йәштәргә шуны әйтер инем: ауылға эшкә барыу - алған белемеңде юғалтыу, тип уйлау ҙур хата. Буласаҡ табип уҡыу йортон һайлағанда уҡ кеше һаулығы өсөн һаҡҡа баҫасағын ныҡлы аңларға тейеш. Ә инде медицина университетын тамамлайһың икән, был өлкәлә барыһын да мотлаҡ белергә бурыслыһың. Программала ҡатнашыуҙан баш тартыуҙың сәбәптәре лә нәҡ ошонда. Йәштәр яуаплылыҡ алырға, хеҙмәт юлын насарыраҡ шарттарҙа башларға ҡурҡа. Хөкүмәт ҙур ярҙам күрһәтә, йәштәрҙең уны файҙаланып ҡалмауы үкенес.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# СТУДЕНТТАРҒА -ПОСОБИЕ

**Улым БДУ-ның 2-се курсында уҡый. Ирем менән күптән айырылыштыҡ, алимент түләмәне. Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләге студенттарға матди ярҙам тейеш, тип ишеткәйнем, шул дөрөҫ булһа, ошо хаҡта аңлатма бирһәгеҙ ине?**

Студенттарға диетик туҡланыу өсөн пособие түбәндәге осраҡтарҙа бирелә:

- әгәр улар даими рәүештә Башҡортостан территорияһында йәшәһә;
- юғары һәм махсус урта дәүләт уҡыу йорттарының көндөҙгө бүлектәрендә уҡыһа;
- 23 йәштән кесе булһа;
- ғаилә килеме йәшәү минимумынан(5407 һум) кәм булһа;
- хроник сирҙәр менән яфаланһа.

Был сирҙәрҙең исемлеге: ҡан ауырыуҙары(анемия, гемофилия, онкогематологик сирҙәр), эндокрин системаһы ауырыуҙары (етерлек кимәлдә туҡланмау, матдәләр алмашыныуының боҙолоуы, шәкәр диабеты), ҡан әйләнеше системаһының боҙолоуы (коронар ҡан тамырҙары атеросклерозы, ҡан баҫымы ауырыуы, миокардиар), тын юлы органдары сирҙәре (ҡурылдай астмаһы, тын ҡыҫылыу), аш һеңдереү ағзалары ауырыуҙары (гастрит, колит,энтероколит, энтерит, ашҡаҙан һәм бөйән сей яраһы, үт юлдарында таш, панкреатит, холецистит), тире ауырыуҙары(псориаз, экзема), һөйәк-туҡыма сирҙәре (остеомиелит), һейҙек системаһы ауырыуҙары (гломерулонефрит, пиелит,пиелонефрит), туҡланыу һәм аш һеңдереүҙе тотҡарлаусы тыумыштан булған үҫеш ғәриплеге, ҡан әйләнеше боҙолоу менән бәйле йөрәк сирҙәре, туберкулез, пневмокониоз.

Диетик туҡланыу өсөн пособие шулай уҡ аҙ тәьмин ителгән түбәндәге студенттарға түләнә:

- ауырлы ҡатындарға;
- 1,5 йәшкә тиклемге балаһы булған әсәләргә;
- йөрәкхәтләнеү йәки операция һөҙөмтәһендә өҫкө һәм аҫҡы теш яңаҡтары зыян күреп, аҙыҡ сәйнәү функцияһы боҙолған студенттарға;
- ағыуланыу, йоғошло сир, профессиональ ауырыуҙар һәм операциянан һуң дауаланыусы студенттарға;
- йоғошло гепатит кисергән студенттарға.

Бының өсөн түбәндәге документтар кәрәк: паспорт йәки шәхесте раҫлаусы башҡа документ, ғариза, йәшәгән урындан ғаилә составы тураһында белешмә, пособиеға ғариза биргәнгә тиклемге өс айҙа ғаилә ағзаларының килеме тураһында белешмә, көндөҙгө бүлектә уҡыуығыҙ хаҡында белешмә, хроник сир менән ауырыуығыҙ (йәки ауырлы булыуығыҙ) хаҡында больницанан белешмә, йәш ярымға тиклем балаһы булған әсәләрҙән балаһының тыуыуы тураһында таныҡлыҡ.

Студенттарға махсус диетик туҡланыу өсөн көнөнә 13 һум түләнә. Пособиены йәшәгән урын буйынса хеҙмәт һәм социаль яҡлау бүлеге тәғәйенләй.

Шулай уҡ ғаилә ҡорған студенттар өсөн дә матди ярҙам ҡаралған. Студенттар ғаиләһендә бала донъяға килеү менән бәйле 2012 йылдың 1 ғинуарынан бер тапҡыр түләнә торған пособие күләме һәр балаға 14 266 һум 12 тин тәшкил итә. Бының өсөн түбәндәге документтар кәрәк: пособие тәғәйенләү тураһында ғариза, бала тыуыу тураһында ғариза (ЗАГС-тан), банк реквизиттарығыҙ (пособиены банк аша алырға теләһәгеҙ). ИНН, СНИЛС (пенсия страховкаһы таныҡлығы).

Студент-ата-әсәләргә ( әгәр ғаилә башлыҡтарының берәүһе генә студент йә аспирант булған хәлдә лә) айлыҡ түләүҙәр ҡаралған, тик уларҙың дәүләт уҡыу йортонда һәм көндөҙгө бүлектә уҡыуы шарт. Пособие ир йә ҡатын исеменә социаль яҡлау бүлеге тарафынан айына 250 һум күләмендә тәғәйенләнә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## МИЛӘШ



Киптерелгән миләш эс китеүҙе баҫа; миләш ҡайнатмаһы ҡан китеүҙе туҡтата; миләш бауырҙа таш булғанда, ревматизмдан дауа, һейҙек ҡыуҙырыусы яҡшы сара булып тора.

## БАУЫР АУЫРТҺА

❖ Бер тигеҙ өлөштә ҡыҙыл көртмәле (брусника), ала миләүшә (фиалка), бөтнөк (мята) алырға (мәҫәлән, 2 ҡалаҡ) һәм 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ауыртыныу бөткәнсе дауаланырға, әҙерләгән төнәтмәне көнө буйы эҫеп бөтөрөргә; ❖ һары мәтрүшкә үләнен, мәтрүшкәне, аҡ сәскәне, бөтнөктө бер тигеҙ өлөштә болғатырға, 2 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көн буйы эҫеп бөтөргә. Ауыртыу бөткәнгә тиклем дауаланырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## СЕБОРЕЯ

❖ 1 лимон һутын 1 йомортҡа һарыһы менән болғатырға, 1 балғалаҡ глицерин һәм ярты стакан одеколон өҫтәргә. Ошо лосьон менән бит тиреһен таҙартырға; ❖ балан һуты себорея ваҡытында һыткыларҙы бөтөрөргә ярҙам итә; ❖ имән ҡайырыһы төнәтмәһен (1:5) ҡулланырға була. 1 стакан төнәтмәгә 1 балғалаҡ бал өҫтәргә мөмкин. Баш тиреһе артыҡ майлы булғанда ла файҙалы; ❖ ҡырҡбыуын үләне төнәтмәһе (1:10) себореялы дерматиттан ҡотолорға булышлыҡ итер.

## АДЕНОИДТАР

Аденоид тип йотҡолоҡ тәңгәләндәге биҙҙәрҙең үҫеүенән килгән ябай шештәр атала. Уларҙан ҡотолоу өсөн түбәндәге рецепттарҙы тәҡдим итәм: иртән һәм кисен ярты литр кәзә һөтө эсергә. Был дауаның терапевтик эффекты иҫбатланған; 2 өлөш сөгөлдөр һутына 1 өлөш бал ҡушырға. Тымаулап торғанда танауҙың һәр тишегенә көнөнә 4-5 тапҡыр тамыҙырға. Был дауа танау ҡыуышлығында аденоидтар булыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тымауҙан бигерәк файҙалы; йоҡлар алдынан танау ҡыуышлығын, тамаҡты тоҙ йәки аш содаһы менән сайҡатырға; 1-2 тамсы һыуыҡ һыу эсергә, алдан тамаҡты һыуыҡ һыу менән сайҡатып, сыныҡтырырға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

ТЕЛГЕНӘМ-БЕРГЕНӘМ

# БЕЛМӘГӘНДЕҢ...

## йөҙө ҡыҙара

**Ике әсә һөйләшә. Икеһенең дә балаһы башланғыс класс уҡыусыһы, күрәһең. Кескәйҙәренең мәктәптән арып ҡайтыуы, өйгә бирелгән эштәрҙе нисек үтәүе, ниндәй тәьҫораттар менән ҡайтыуы тураһында ине гәптәре.**

**Берәүһе ҡыҙының башҡорт теленән өлгәшмәүенә зарланды:**

- Бер кемгә лә кәрәкмәгән фән ул бөгөн. Бына мин үҙем башҡорт булһам да бер ҡасан да башҡортса һөйләшмәнем. Балаларҙың башын ғына бутайҙар. Аҙнаһына бер-ике сәғәттә нимәгә өйрәнеп була инде? Унан баш тартыу тураһында кемгә ғариза яҙырға икән?- тип, икенсеһенә мөрәжәғәт итте.

**Икенсеһенең яуабы ифрат оҡшаны миңә:**

- Балаң 4-се класҡа етте, һин һаман бер һүҙҙе һөйләйһең. Аҙнаға ике сәғәт булһа, айына-йылына байтаҡ йыйыла бит. Уның ҡарауы, башҡа бер ҡайҙа ла ала алмаған белемгә эйә була. Үҙеңдең тыуған телең бит, әсәйең һөйләшкән тел. Үҙең яратмаҫаң тыуған телеңде, билдәле, ҡыҙың да уны өйрәнгеһе килмәйҙер. Мин үҙем урыҫ булһам да улым башҡорт телен мотлаҡ өйрәнәсәк. Үҙенең тыуған республикаһы, Башҡортостан тарихы, уның арҙаҡлы шәхестәре, мәҙәниәте, тарихи ҡомартҡылары тураһында тағы ниндәй дәрестә өйрәнер һуң ул, юғиһә?

**Ҡатын артабан үҙенең ике йыл элек Төркиәлә ял иткәндә нисек оятҡа ҡалыуын һөйләне:**

- Төрлө илдән йыйылған бер төркөм туристар менән гел бергә йөрөргә тура килде. Тәүге көндәрҙә сит ил кешеләре менән аралашыуҙан, бөтөнләй таныш булмаған ят мөхиттән алған тәьҫорат бик көслө булғандыр, иғтибар итмәгәйнем. Бер нисә көндән яңы таныштар менән аралашҡанда үҙемде ниҙер етмәгән һымаҡ тойҙом. Бер аҙҙан улар менән бөтөнләй һөйләшер һүҙем ҡалмағанын шәйләнем. Тел белмәүҙән түгел. Төркөмдә французҙар, немецтар, итальяндар байтаҡ ине, шуға күрә аралашыу башлыса урыҫ телендә булды. Һәр кем үҙ иле тураһында бәйән итте. Шуға иғтибар иттем: һөйләгәндә ауыҙҙарынан төкөрөк сәселһә, күҙҙәренән осҡон осто. Күңелдәгеләрен еткерә алмаған кеүек тойолһа, береһе лә аңламаһа ла, үҙ телдәрендә әйтеп, хатта ҡысҡырып ҡуялар. Ысын мәғәнәһендә үҙ иленең илһөйәрҙәре ине улар. Ярышып-уҙышып үҙ төйәктәрен маҡтанылар, күренекле шәхестәре, тарихи ҡомартҡылары менән ғорурландылар, бер-береһен иғтибар менән тыңлап, ҡыҙыҡ тип иҫәпләгән урындарын блокноттарына теркәп тә барҙылар.

Шул ваҡытта үҙемдең Башҡортостан тураһында бер нәмә лә белмәгәнемде аңланым, сөнки уҡығанда ил тарихына өҫтөнлөк бирелде. Ул күптән "тоҙлап" элендә инде. Бәктиһән, тыуған республикабыҙ хаҡында бер нәмә лә белмәйем икән. Бер төрөк яҙыусыларыбыҙ хаҡында һорашты. Мин - ләм-мим. Урта быуаттарҙан һаҡланған замок-һарайҙарын биш бармағы кеүек белгән француз боронғо ҡалаларыбыҙ хаҡында ҡыҙыҡһынды. Был хаҡта ла бер нәмә лә әйтә алманым.

Ниндәй милләт кешеһе булыуыңа ҡарамаҫтан, республикаға исем биргән халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен, телен белергә тейешһең, тигән принцип менән йәшәй ине улар.

Алыҫ сәйәхәттән, шулай итеп, тыуған республикамдың тарихи үткәнен, иҫтәлекле урындарын, арҙаҡлы улдарын мотлаҡ өйрәнәсәкмен, тигән изге уй менән ҡайттым. Һис юғында, улымдың өйрәнеүе өсөн тырышасаҡмын, - тине ул.

Күңелде күтәренкелек биләп алды: аңлы атайәсәйҙәр бар бит арабыҙҙа. Сит милләттән булһа ла, улына башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, ҡомартҡыларына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйған. Ә шулай ҙа иң мөһиме шунда: ҡыҙының өлгәшмәүенә зарланған әнәмәсеһенә ябай ғына миҫал аша тыуған телде, тарихты белеү ниндәй әһәмиәткә эйә булыуын аңлата алды был урыҫ ҡатыны. Рәхмәт уға.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ



## Ун беренсе һабаҡ: "Һәр нәмәнең үҙ әмәле, үҙ мәле"

**Бала бағыуҙы тәрбиәнең ышаныслы тағандарынан башларға кәрәк, тигәйнек. Тағандар өсәү: һаулыҡ, рухи сәләмәтлек, үҙ намыҫың алдында яуаплылыҡ. Ошо өс таған ҡаҡшамаһа, бала белемгә лә эйә булыр, тәбиғи һәләтен дә аса алыр, маҡсатына ла өлгәшер, атай-әсәй йөҙөнә лә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ, ололарға хөрмәт күрһәтер, кеселәргә кеселекле булыр. Ошо тағандарҙы ҡаҡшатмау бурыс.**

Баланы табыу көс түгел, бағыу - көс. Был осраҡта "көс" тигән һүҙгә төп маҡсатыбыҙ - баланы Яҡшы кеше итеп тәрбиәләү, тигән мәғәнә һалынған. Иң беренсе таған - баланың һаулығы, тинек. Һаулыҡ булмаһа, белемең дә, байлығың да, дәрәжәң дә бер ни тормай. Ә һаулыҡты хәстәрләү бала тыуғанға тиклем башлана. Бала һаулығы - әсә һаулығына бәйләнгән. Әлбиттә, дәүләтебеҙ һәр балаға иғтибарлы. Әсә булыр ҡатын тәүге көндән үк иҫәпкә алына, күҙәтеү аҫтында була. Баланы өйгә алып ҡайтыу менән медицина хеҙмәткәрҙәре килеп етә, кәңәштәр бирә, ярҙам ҡулы һуҙа. Әммә һәр тарафтан сәләмәт бала тәрбиәләү өсөн был бик аҙ ғына хәстәрлек. Хәстәрлектең иң ҙуры, иң ҡиммәтлеһе - әсәнең үҙендә, йәғни әсәнең үҙенең әйтеп үтелгән өс тағанда ныҡлы баҫып тороуында һәм кем, ниндәй бала тәрбиәләргә теләүен аңлауында.

Бала тәрбиәһе әсә ҡарынында уҡ башлана һәм артабан да әсә күңеле менән бер була, тигән хәҡиҡәтте беләбеҙ. Әсәнең һәр күҙәнәге тоя алған, уның ғына күңел күҙе күрә алған нескәлектәрҙе бер кем дә һиҙмәйәсәк. "Һәр күҙәнәге" тип әйтеү - тән ағзаларының һиҙгерлеге: күҙ тартыу, ирен тартыу, түш сәнсеү, төш күреү, йөрәк һыҙлау - былар бөтөнөһө лә әсә менән баланың күҙгә күренмәгән нурҙар менән тоташыуынан килә. Бала тыуғандан һуң, тәбиғәт әсәгә иҫ китмәле бүләк яһай: әсә инә ҡоштай һиҙгер, инә боландай уяу, ҡолонон иркәләгән бейә кеүек назлы, себештәрен ҡоҙғондан ҡурсалап ҡанат аҫтына алған тауыҡ һымаҡ хәстәрле, бөркөтләй осҡор, һөләүһендәй сос була башлай. Миҫал өсөн шуны ғына иҫегеҙгә алығыҙ. Йәш сағында бер ни белмәй, киске энерҙән таң ҡыҙарғансы ҡаты йоҡоға талған ҡыҙ, сабыйы тыуғас, бөтөнләй үҙгәрә лә ҡуя. Сабыйының тын алышы ике серәк булһа ла, мышҡылдаһа ла уянып китә. Уяна ла балаһын бағa, күңеле тынысланғас, ята ла башы мендәргә терәлеү менән йоҡлап та китә ала. Бер төндә әллә нисә тапҡыр уянған әсә көндөҙөн һин дә мин йөрөп ята. Тағы шундай һанап бөткөһөҙ сифаттар уяна сабыйлы әсәлә. Бала - бауыр ите, тип әйтерлек сифаттарға әсәнән башҡа бер кем дә эйә була алмай. Шуның өсөн бала - күҙ ҡараһы, бала - бауыр ите, бала - йөрәк майы, тигән һүҙбәйләнештәр әсә ағзаһы менән бәйләнгән. Кендек киҫелгәндән һуң да бик оҙаҡ ваҡыт бала йөрәге әсәнеке менән ҡуша тибә, бала тойомо әсәнеке менән ҡуша була. Бала әсә ҡарынында ваҡытта уҡ әсәнең уй-кисерештәрен тоя башлай. Әсә тыуасаҡ балаһы хаҡында хыяллана, уны күҙ алдына килтерә, уның менән йәшәй, аралаша.

Тап ана шул "аралаша" тигән һүҙҙән башлана ла инде баланың артабанғы рухи сәләмәтлеге - йән сәләмәтлеге. Билдәле булыуынса, кешенең тән сәләмәтлегенә йән сәләмәтлегенең тәьҫире иҫ китмәле көслө. Йән сәләмәтлеге кешенең уй-кисерештәре, тойоу-һиҙеү сифаты менән бәйле. Бала әсәнең кәйефен тоя. Үҙегеҙ һынап ҡарағыҙ. Бала янына килгән саҡта ҡыуанып та, бойоғоп та бағып ҡарағыҙ. Шул саҡ баланың ни тиклем һиҙгер булыуын үҙегеҙ тойорһоғоҙ. Ә бит бала менән әсә араһындағы тойоу-һиҙеү бала ҡарында саҡта үҙең фекер ҡорған, йырлаған телең аша бирелә. Икенсе телдә иркәләү-наҙлау, икенсе телгә күсеү бала күңеле менән әсә күңеле араһына пәрҙә ҡора.

Быны үҙ күҙегеҙ менән күреп, үҙ йөрәгегеҙ аша үткәреп инанғығыҙ килһә, тәжрибә үткәрегеҙ. Балаға берсә тыуған телдә, берсә ят телдә иркәләү һүҙҙәре әйтегеҙ. Берсә тыуған телдә, берсә ят телдә һамаҡлау әйтегеҙ. Сабыйҙары булған әсәләр! Ошо тәжрибәне үткәрегеҙ ҙә күңел пәрҙәһенең ни икәнен аңлаһағыҙ, редакцияға хат яҙып ебәрегеҙ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# УРАМ ЙОҒОНТОҺО ЛА БАР...

**Бала тәрбиәләү тураһында фекер алышыу бик ҡатмарлы өлкә шул ул. Халыҡ та: "Бейәнән ала ла, ҡола ла тыуа" тип әйтә бит. Тәрбиә бер үк ғаиләлә бирелә, әммә унда биш бала биш төрлө булып үҫергә мөмкин. Тағы ла "Бишектәге бала бишкә төрләнер" тип тә әйтәләр.**

Мәҫәлән, минең Галина исемле әхирәтемдең бер улы үтә иманлы булып үҫте һәм аҙаҡ дин әһеле булып китте, ә икенсеһе - эскесе. Уйлаһаң, уйылып китерлек. "Урал батыр" эпосында ла шулай бит: Шүлгән - яуызлыкты, Урал яуызлыҡҡа ҡаршы көрәште һайлай. Тағы ла, тәрбиәнән генә түгел, кешенең ҡылыҡ-фиғеле нәҫелдән, ҡандан да килә, тигәндәре лә дөрөҫтөр. Боронғолар юҡҡа ғына кейәү йә килештең нәҫелен, шәжәрәһен тикшереп кенә ғаилә ҡормағандыр.

Ижад йортонда "Керамика" түңәрәген етәкләгәндә, Настя исемле ҡыҙ бала шөғөлләнергә йөрөнө. Ул минең беренсе ярҙамсыма әйләнде. Дежурныйҙарҙы тәғәйенләү, тәртип, таҙалыҡ һаҡлау - барыһы ла уның яуаплылығында ине. Ата-әсәһе лә бик бик һыҙ ярҙам итте миңә. Шундай һәйбәт ғаиләлә шундай аҡыллы ҡыҙ бала тәрбиәләнгән, тип гел һоҡландым. Настя үҫте, мәктәпте тамамлап, уҡырға инде. Алты-ете йыл үткәндер, урамда осраттым ул ғаиләне. Настяның улы ла үҫеп килә икән. Настяның атаһы янына килеп, ейәненә ымлап, бышылдап ҡына "Ейәнегеҙ нисек?" тип һораным. Ул күңелһеҙ генә итеп: "Не наша кровь..."- тип ҡуйҙы. Ҡыҫҡа ғына һөйләмдән бөтәһе лә аңлашылды.

Күп ғаиләләр балаһын үҙенсә тәрбиәләргә тырыша, матур өлгө күрһәтә, әммә уларға уратып алған мөхит тә йоғонто яһай шул. Бер танышымдың һөйләгәндәрен онота алмайым: "Наҙлап, һөйөп кенә үҫтерҙем бер бөртөк баламды, - тигәйне ул. - Андерсендың әкиәттәрен тыңлап, аҡыллы, хисле бала булып үҫте. Мәктәптә лә өлгөлө булды. Тик 8-се синыфта уҡып йөрөгәндә Ново-Александровка биҫтәһенән беҙҙең районға күсерелгән ғаиләләрҙәге балалар беҙҙең мәктәпкә уҡырға йөрөй башланы. Шул балалар менән аралашып, күҙгә күренеп үҙгәрҙе лә китте балам. Урамға сығып китергә ашҡынып тора, һуңлап ҡайта башланы. Күпме борсолоуҙар кисерергә тура килде. Бөтә тәрбиәмде юҡҡа сығара яҙҙы мөхит. Әлдә дуҫтарым ярҙамға килде. 9-сы синыфтан һуң баламды был мәктәптән алып, училищеға уҡырға урынлаштырҙым. Бер йылда элекке асылына ҡайтты балам..."

Эйе, бишектәге бала бишкә төрләнә. Мәрйәм Бураҡаева ошо йәһәттән бик фәһемле фекерҙәр яҙа, кәңәштәр бирә үҙенең "Тәнәйҙәргә тәғәйен тәрбиә" яҙмаларында. Бер һорауға яуап алғым килә. Бик йыш ҡына ишетергә тура килә быныһын: Быны балалар баҡсаһынан ҡайтып барған бала ата-әсәһенә: "Бер малай миңә һуҡты", - тип ошаҡлаша. Мотлаҡ: "Һин дә уға һуҡ, ҡурҡып торма, бирешмә!" - тигән яуапты ишетәһең. Ошо хәлгә ниндәйерәк аңлатма бирер икән яҙыусы?

**Айгөл АХУНОВА.**

КӘРӘКЛЕ ЭШ!

# ҠОМАРТҠЫЛАР...

## аҡса менән баһаланмай

**Республикабыҙ ҡаҙылма байлыҡтарға ғына түгел, ә тәбиғи, архитектура һәм мәҙәниәт ҡомартҡыларына ла бай. Аңыбыҙ ауыҙ-тел ижадын, фольклорҙы борондоларҙан ҡалған мирас тип ҡабул итһә лә, ҡасандыр шул уҡ ата-бабаларыбыҙҙың ҡулы менән төҙөлгән, эшләнгән архитектура өлгөләрен мирас, ҡомартҡы булараҡ ҡабул итеп бармай. Ә бит уйлап ҡараһаң, Башҡортостандың индустриаль мираҫы ла бөгөн үҙендә сиселмәгән серҙәр һаҡлай, туристик маршруттар проекттары эшләнеүен көтә. Бөгөн республикала бындай ҡомартҡылар күпме һәм улар ниндәй хәл-торошта? Ошо һорауҙарға асыҡлыҡ индереү маҡсатынан Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса ғилми-производство үҙәге директоры Данир ҒӘЙНУЛЛИНға мөрәжәғәт иттек.**



Шишмә районы Дурасов ауылындағы ағас тирмән.

- Бөгөнгә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының мәҙәни мираҫы (тарих һәм мәҙәни һәйкәлдәр) объекттары исемлеге"нә ярашлы, республика райондары буйынса барлығы 69 индустриаль мираҫ ҡомартҡыһы һаҡланып ҡалған. Уларҙың 26-һы дәүләт ҡурсауына алынған, 43-ө - дөйөм Рәсәй исемлегенә инмәгән, шул рәүешле "кабаттан асыҡланған" тигән статус аҫтында йөрөй. Сәнәғәт архитектураһы һәйкәлдәренең күпселеге ауылдарға тура килә, 12-һе - Бөрө, Бәләбәй, Белорет, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Баймаҡ ҡалаларына. Тәүге сәнәғәт объекттары - Урал тау заводтары Башҡортостан территорияһында XVIII быуат урталарында ҡалҡып сыға. Уларҙың бер нисәһе хәҙерге Силәбе өлкәһенә ҡараған башҡорт аҫаба ерҙәрендә - Ҡатау-Тамаҡ, Һатҡы һ.б. ҡалаларҙа урынлашҡан.

➔ **Хәҙерге күҙлектән сығып, был объекттар араһында завод-фабрика бинаһы булып ҡына түгел, ә ҡыҙыҡлы объект булараҡ игтибарҙы йәлеп итерлектәре бармы?**

- Нуриман районының Красный Ключ ҡасабаһында, мәҫәлән, беренсе губерна электр станцияһы булған, унан XXI быуат башына дүрт кирбес бина һәм кирбес торба, плотина, шлюздар, механизмдар һаҡланып ҡалған. 2006 йылда территорияны урыны-урыны менән тикшергәндән һуң, бында бөтөн нәмә алты йыл һуҙымында ҡыйратыла һәм уның урынына яңы электр станцияһы төҙөлә, тигән һығымта яһала.

Шулай уҡ республика территорияһында ике боронғо тирмән һаҡланып ҡалған. Береһе Миәкә районының Йәрлекәү ауылында, икенсеһе, ағастан төҙөлгәне һәм 4 бинанан торғаны - Шишмә районының Дурасов ауылында. Үкенескә күрә, һуңғыһы хәҙер буш тора һәм яйлап емерелеп бара. Дәүләкән районында батша заманында немецтар кирбестән һәм таштан төҙөгән элеватор өлөшләтә һаҡланған. Дәүләкән оно ул ваҡытта Өфө губернаһына ғына түгел, күрше өлкәләргә лә дан тоткан. Бөгөн был бинаның бары тик урта өлөшө генә ҡалған. Ағас эшкәртеү заводтары, ағастан төҙөлеү сәбәпле, бөтөнләй тиерлек һаҡланмаған. Шуға күрә бөгөн һаҡланып ҡалған тарихи-мәҙәни, индустриаль ҡомартҡыларҙы һаҡлау, реставрациялау, юғалғандары тураһында мәғлүмәттәр йыйыу - беҙҙең Үҙәктең мөһим бурыстарының береһе.

➔ **Һаҡланып ҡалған индустриаль архитектура ҡомартҡылары буйлап киләсәктә туристик маршруттар эшләү Башҡортостанды танытыуға тағы бер аҙым булмаҫ инеме икән?**

- Тәү сиратта, ошо объекттарҙы һаҡлап ҡалыуға этәргес булыр, экскурсия-туристик эшмәкәрлекте артабан үҫтереүгә лә ҙур йоғонто яһар ине. Мәҫәлән, Мәләүез һәм Йылайыр райондарындағы Воскресенское һәм Преображенский заводтарының буш торған биналарын реставрациялап, уларҙа халыҡ кәсептәре, сувенирҙар эшләү үҙәге, музейҙар асырға мөмкин.

Әйткәндәй, Баймаҡ районындағы "Ирәндек" тарихи-археологик ландшафт музейы-ҡурсаулығын үҫтереү сиктәрендә Шүрәле йылғаһындағы ташландыҡ алтын табыу приискыһын (XIX быуаттың икенсе яртыһы - XX быуаттың 30-40-сы йылдары) тергеҙеү планлаштырыла. Уның бер өлөшөндә старателдәрҙең зыяраты, тулыһынса емерелгән землянкалар һәм контора бинаһының ҡалдыҡтары ҡалған. Әлегәсә йылға ярҙары буйында старателдәрҙең бынан бер быуат элек ҡулланған лотоктары һәм боронғо гидротехник ҡоролмаларҙың ҡалдыҡтары осрай. Ошо индустриаль ҡомартҡы объекты нигеҙендә башҡорт ерҙәрендә алтын табыу һәм тау эшен үҫтереүгә бағышланған махсуслаштырылған музей экспозицияһы асырға мөмкин.

➔ **Ҡайһы бер завод-фабрикалар Башҡортостандың аҫаба ерҙәрендә урынлашһа ла, бөгөн улар ситтәр ҡулында. Бөгөн республикала ла ерҙәр шәхси милеккә тапшырыла, архитектура объекттарына Башҡортостандың үҙендә лә юғалыу хәүефе янамаймы?**

- Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа мәҙәни мираҫ объекттары урынлашҡан бик күп завод-фабрикаларҙың милекселәре алышына. Ауыл хужалығы предприятиелары банкротка әйләнделәр, ерҙәр шәхси милеккә күсә. Был осраҡта милекселәрҙе мәҙәни мираҫты емермәскә, уларҙы урлап, талап бөтмәскә, киреһенсә, реставрацияларға кәрәклегенә инандырыу зарур. Мәҫәлән, Шишмә районының Дурасов ауылында алпауыт Дурасовтың 100 йыллыҡ тарихы булған ике ҡатлы ағас тирмәне һаҡланған. Ауыл хужалығы предприятиеһы банкротҡа әйләнгәс, эске идарасылар бинаны 200 меңгә баһалап, уны һатырға йыйына, тиҙәр. Бындай хәлдәргә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш. Был йәһәттән беҙ район хакимиәттәре башлыҡтары менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ, уларға индустриаль мираҫтың баһаһын аҡса менән генә иҫәпләү мөмкин түгеллеген, был объекттарҙың милләт, халыҡтар тарихының айырылғыһыҙ өлөшө булыуын аңлатабыҙ.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

БАЛАҢА УҠЫ!

# ФИЛ НИМӘГӘ ОҠШАШ?

Индустар ҡараңғы бинаға бер филде индергәндәр һәм уны халыҡҡа күрһәтергә уйлағандар. Филде күрергә теләгән бер нисә кеше шулай уҡ был бинаға ингән. Унда дөм-ҡараңғы булған, урамдан саҡ ҡына ла яҡтылыҡ төшмәгән. Инеүселәр филде ҡулдары менән ҡапшай башлаған.

Берәүһе филдең томшоғон ҡапшап, былай тигән:

- Фил йыланға оҡшаған икән...

Ә икенсеһе филдең ҡолағын тотоп:

- Юҡ, фил ҙур елпеүескә оҡшаған...

Ә өсөнсөһө уның аяғын ҡосаҡлап, шулай тигән:

- Фил бағанаға оҡшаған...

Ә дүртенсеһе филде арҡаһынан һыйпап хәл иткән:

- Фил тәхеткә оҡшаған.

Ҡараңғы биналағы һәр кеше филдең бер ағзаһын ҡулдары менән ҡапшап өйрәнеп, уның ни рәүешле икәнен аңлатырға маташҡан. Һәм береһенең фекере икенсеһенекенән нык ҡына айырылған. Берәү филде йылан кеүек, икенсеһе елпеүес кеүек тип иҫбат иткән...

Эш ҡараңғылыҡта ғына түгел. Был кешеләр ҡулдарына май шәм тотоп, филде яҡтыртып ҡараһалар ҙа, барыбер уларҙың баһаһы төрлөсә булыр ине. Донъяла нисә кеше - шул тиклем фекер. Йәшәйеш шуныһы менән ҡыҙыҡ та, мәғәнәле лә. Башҡалар аҡылы, башҡалар фекере менән йәшәмә, һәр нәмәгә үҙ фекерең булһын, тигәнгә ишара был.

Мөршиҙә УЙСАЛ.
"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.

ОҺО, ЯҠШЫ ХӘБӘР!

# БОРОНҒО ШУМЕР ИЛЕНДӘ...

## башҡорт ғалимының китабы сыҡҡан

**Ираҡтағы Ҡордистандың баш ҡалаһы Эрбилде археологтар Месопотамияның иң боронғо ҡалаһы тип иҫәпләй, бында кешелек донъяһы һигеҙ мең йыл йәшәй. Бынан дүрт мең йыл элек, Шумер дәүерендә, был ҡала менән Шүлгә батша һәм уның ярҙамсыһы Зәриҡүм идара иткән. Уларҙың исеме башҡорттарҙың "Урал батыр" эпосында һаҡланып ҡалған. Шумер батшаһы Шүлгәнең (Шүлгәндең) атаһы Ур-Намму булған. Ул беҙҙең эраға тиклемге 2112-2094 йылдарҙа йәшәп, кешелек тарихында беренсе юридик законлар (кодекстар) барлыҡҡа килтереүсе булып танылған.**

Башҡорт эпосындағы Урал батыр ҙа Ур-Намму кеүек үҡ юридик закондар сығарыусы булып тора. Был тарихи оҡшашлыҡтар, тап килеүҙәр этнографтар һәм филологтар тарафынан да иҫбат ителә. Лингвистар билдәләүенсә, башҡорт теленең фонетикаһы боронғо иран теленә ҡайтып ҡала, ә Боронғо Шумер урынлашҡан урында хәҙер иран телле ҡорд халҡы йәшәй. Шумерҙы өйрәнеүсе С.Н. Крамер иҫбатлауынса, боронғо шумер теленең субстраты булып иран теле, йәки ҡорд теле тора. Башҡорттар һәм ҡордтарҙың Шумер менән тарихи бәйләнеше ошо халыҡтарҙың этник туғанлығын дәлилләй.

Тарихсы Салауат Ғәлләмов күп йылдар инде ошо ҡатмарлы һорауҙарға яуап табыу өҫтөндә эшләй. Салауат Ғәлләмовтың ғәрәп теленә тәржемә ителгән "Боронғо арийҙар һәм мәңгелек Ҡордистан" (Древние арии и вечный Курдистан. Москва. "Вече", 2007) тигән китабы быйыл апрель баштарында Төньяҡ Ираҡтың баш ҡалаһы Эрбилдә үткәрелгән традицион халыҡ-ара китап йәрминкәһендә уҡыусыларға тәҡдим ителде. Китапты ҡорд ғалимы, тарих фәндәре докторы Исмаил Хасаф тәржемә иткән. Исмаил Хасаф - ҙур сәйәси эшмәкәр һәм Сүриәләге "Берҙәмлек" ҡорд политик партияһына нигеҙ һалыусы.

Эрбиль ҡалаһында китап йәрминкәһе асылыу көндәре унда Мәскәүҙәге Көнсығыш институты директоры профессор Л.Наумкиндың һәм Рәсәйҙең көнсығышты өйрәнеүсе башҡа ғалимдарының сәфәре менән тап килде. Делегация ағзаларына Салауат Ғәлләмовтың ғәрәп теленә тәржемә ителгән китабы күрһәтелә. Профессор Л.Наумкин белдереүенсә, Рәсәйҙә ғәрәп һәм иран телле ғалимдарҙың хеҙмәттәрен урыҫ теленә тәржемә итеү ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра, шуға ла бында башҡорт ғалимы Салауат Ғәлләмовтың урыҫсанан ғәрәпсәгә тәржемә ителгән китабын күреү улар өсөн көтөлмәгән ваҡиға була.

Салауат Ғәлләмовтың был китабы Мәсүд Барзани етәкселегендәге Ҡорд демократик партияһына ҡараған нәшриәттә баҫтырып сығарылған. Ҡорд Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, Салауат Ғәлләмовтың китабын Марокко, Алжир, Тунис, Мысыр, Сауд Ғәрәбстаны, Иордания, Иран һәм Пакистан илдәренең бик күп уҡыу йорттарына һәм китапханаларына өйрәнер өсөн ебәрергәндәр. Эрбиль ҡалаһының Сәләхитдин Әйүп исемендәге университет ректоры К. Дизайн Салауат Ғәлләмовты университет уҡытыусылары һәм студенттары алдында сығыш яһау өсөн семинарҙарға саҡырырға ниәтләй.

*✓ Википедияға үҙеңдең фекереңде яҙыр алдынан ул ҡайҙалыр, ниндәйҙер абруйлы сығанаҡта, академик баҫмала донъя күргән булырға тейеш. Шунан һуң ғына уны сайтҡа урынлаштырырға мөмкин.*

# МӘҒЛҮМӘТ БЫУАТЫНА

## ә мәғлүмәтле кеше

**Кешелек донъяһы мәғлүмәт таратыу, ғилем өйрәнеү, белем эстәү йүнәлешендә яңы дәүергә аяҡ баҫыу алдында тора. Тәүтормошта кешеләр мәғлүмәтте бер кешенән икенсеһенә тапшырған, йәғни мәғлүмәт ҡанбабалар аша ғына таралған. Урта быуаттарҙан башланған мәғлүмәтте бер кешенән күп кешегә таратыу йүнәлешендәге сәйәсәт әлеге көндәргә тиклем дауам итә. Хәҙер беҙҙең кешелек мәғлүмәтте күп кешенән күп кешегә таратыу сәйәсәте алдында тора. Интернет-технологиялар үҫеше беҙгә ошондай мөмкинлек бирә. Донъя кимәлендә интернет- технологиялар үҫеше һәм уларҙың донъя халыҡтары телдәре өсөн әҙерләнгән проекттары бихисап. Редакция ҡунаҡтары Башҡорт Википедияһының хакимдары (администраторҙары) Рөстәм НУРЫЕВ менән Зөфәр СӘЛИХОВ күптән түгел Ҡаҙағстандың Алматы ҡалаһында төрки телле Википедияларҙың - Викиберләшмәләрҙең конференцияһында ҡатнашып ҡайтты һәм унда алған тәьҫораттарын, төйнәгән уй-фекерҙәрен гәзит уҡыусыларға ла еткерергә риҙалашты.**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Беҙ Ҡаҙағстанда үткән сараға республиканан өс уҙаман барҙыҡ. Өсөнсөбөҙ Күмертауҙан Азат Хәлилов булды. 20-21 апрелдә Алматыға Ҡаҙағстан, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Саха, Төркиә, Төркмәнстан, Үзбәкстан республикаларынан делегациялар, шулай уҡ Ҡытайҙан, Болгариянан, АҠШ-тан, Израилдән, Германиянан, Швециянан вәкилдәр йыйылды. Конференцияла бихисап мәсьәләләр ҡаралды, әммә һүҙ башлыса төрки халыҡтарының интернет киңлектәрендә үҙ телендә аралашыу башҡа мәсьәләләр буйынса мөрәжәғәт итҡәс, ярҙамға килергә һәр саҡ әҙермен, тине. Шундай аралашыуҙарҙа бер-берең менән күҙгә-күҙ ҡарап танышаһың, һәр кем һиңә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тора. Ғөмүмән, конференция юғары кимәлдә ойошторолғайны. Лекциялар инглиз телендә яңғыраһа ла, рус теленә тәржемә ителде.

Ҡаҙаҡ Википедияһына килгәндә инде, уны дәүләттәре ҡабул иткән, таныған. Идара итеү эшенә бик әүҙем егеттәр тупланған. Сағыштырмаса барыһы ла йәштәр, араларында хатта

**▸ Тимәк, Википедия ҡағиҙәләре буйынса мәҡәләләрҙе ниндәйҙер баҫма сығанаҡтан туранан-тура күсереп ҡуйыу тыйыла. Ә бына Википедияның яуаплылығы нимәнән сығып баһалана, ундағы мәҡәләләрҙә ысынбарлыҡ, дөрөҫлөк, хәҡиҡәт критерийҙары нисек билдәләнә?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Википедияның икенсе төп принцибы - ул уртаҡ ҡараш. Һәр күренешкә, һәр йүнәлешкә, һәр мәғәнәгә уртаҡ ҡараш булырға тейеш. Мин нимә беләм - шулар тураһында яҙам. Икенсе кеше инһә лә, үҙенең белгәндәрен яҙа, әммә беренсе кеше яҙғанды, хатта ки уның ҡарашына ҡаршы булһа ла, юймай, бары тик үҙенең ҡарашын ғына өҫтәп яҙып ҡуя ала. Бына шулай бер нисә ҡараш, уртаҡ фекер барлыҡҡа килә. Әйтәйек, башҡорттарҙың этногенезы буйынса әлеге көндә рәсми ҡабул ителгән өс төрлө ҡараш йәшәй, йәғни башҡорттар төрки, фин-уғыр, ҡатнаш сығышлы, тип раҫлана. Ә Салауат Ғәлләмовтың, башҡорттар һинд-иран сығышлы, тигән ҡарашын күптәр уйҙырма



*Википедияны ҡурсалаған глобаль фонд - "Викимедиа Фаундэйшн" (Wikimedia Foundation) шундай идеология алып бара: кешелек йәмғиәте туплаған барлыҡ мәғлүмәт һәр милләттең теленә тәржемә ителергә һәм асыҡ, ирекле ҡулланыуҙа булырға тейеш. Шулай итеп, башҡа милләттәрҙең мәғлүмәтен һәм мәҙәниәтен һәр кем үҙенең туған телендә өйрәнһә, белһә, ул халыҡтарҙың телен өйрәнеү теләге лә тыуасаҡ.*

тип иҫәпләй һәм уны ҡабул итергә теләмәйҙәр. Ләкин ғалим бар, фекер бар. Википедияның русса бүлегендә лә, башҡортса бүлегендә лә дүрт фекергә лә урын бирелә. Донъяла абсолют дөрөҫлөк юҡ, һәр кемдең үҙенең дөрөҫлөгө, һәр кем үҙенсә хаҡлы. Бына шуның менән килешеп йәшәргә кәрәк. Үҙеңдең хаҡлығыңды өҫтөн ҡуйып, башҡаларҙыҡын һанға һуҡмай ярамай.

**Зөфәр СӘЛИХОВ:** Ләкин шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: Википедияға үҙеңдең фекереңде яҙыр алдынан ул ҡайҙалыр, ниндәйҙер абруйлы сығанаҡта, академик баҫмала донъя күргән булырға тейеш. Шунан һуң ғына уны сайтҡа урынлаштырырға мөмкин. Әгәр автор үҙ раҫлауҙарының сығанағын күрһәтмәһә, ҡуйылған мәҡәләне Википедиянан юйып ташларға тура килә.

**▸ Хәҙерге төрки халыҡтары араһында, бигерәк тә уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарынан һуң, алдынғылыҡ өсөн көрәш бара. Ниндәйҙер кимәлдә һәр береһе үҙен, бына беҙ беренсе, беҙ мөһимерәк, тип иҫәпләй. Шундай мәлдә бөтөн мәғлүмәтте, фекерҙәрҙе интернетҡа ҡуйыу серҙәребеҙҙе икенсе бер республиканыңмы, дәүләттеңме ғалимдарына һатыу булмаймы?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Википедияның тағы бер принцибы - ул сәйәсәттән азат. Унда уртаҡ, нейтраль ҡараш ҡына бар. Белем, ғилем - ул бит бөтөн кешеләрҙең уртаҡ хазинаһы. Уны тыуҙырып, башҡалар ишетмәһен, күрмәһен, белмәһен, тип, өҫтөнә менеп ултырыу кәрәкмәй. Википедияла бер ниндәй ҙә сикләү, тема тарлығы юҡ. Башҡа телдәрҙә, башҡа тел бүлектәрендә булған мәҡәләләрҙе тәржемә итеп ҡуйырға була. Бөтә Википедиялар ҙа мәҡәләләрҙе инглиз теленә тәржемә итергә тырыша. Әгәр мәғлүмәт инглиз теленә тәржемә ителһә, улар мотлаҡ башҡа телдәргә таратыла.

**▸ Мәғлүмәтте йәшереп тотоп булмай, тинегеҙ. Әммә кешене ниндәйҙер бер һауыт итеп күҙ алдына килтергәндә, шул һауыт тулмай тороп, ул түгелмәй, тимәк, мәғлүмәт тә тейешле кимәлгә етмәйенсә түгелмәй, ситкә сыҡмай. Шул уҡ ваҡытта йөҙөнсө маймыл принцибы ла бар. Уның асылы шунда: әгәр бер үк эште, ғәмәлде йөҙ маймыл бер үк төрлө башҡара икән, башҡа маймылдар уларҙың ҡылығын, хатта Ер шарының икенсе мөйөшөндә булғанда ла, бермә-бер ҡабатлаясаҡ. Йәғни мәғлүмәт йыһан аша тапшырыла. Шунан сығып ҡарағанда, башҡорттарҙың мәғлүмәт "һауыты" ҡасан тулыр икән?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Тәбиғәттә, үтә ҡыҙыл тиҙ уңа, тигән ҡанун бар. Ә башҡорттоң тәбиғәте шундай: яйлап, уйлап эш итеү ҡанға һеңгән. Тәүҙә ситтән генә ҡарап, күҙәтеп йөрөйбөҙ ҙә, үҙ мәле еткәс тыпырсынмай ғына эш башлайбыҙ һәм эшләп тә ҡуябыҙ. Әлбиттә, әүҙемерәк булыу ҙа ҡамасауламаҫ ине. Викимедиала Википедия ғына түгел бит, унда унлаған проект бар. Бына шул проекттар буйынса мәғлүмәтте лә халыҡҡа еткерергә кәрәк.

**▸ Башҡорт теле уҡытыусылары менән осрашыуҙа шундай фекер яңғыраны: башҡорт теле дәрестәрендә шул тиклем күңелһеҙ, ялҡытҡыс була торғайны, хатта йоҡо килә ине. Тик башҡорт телен яратыуыбыҙ арҡаһында ғына ул дәрескә йөрөй инек. Хәҙер бит яңы технологиялар замананы, Википедияла ниндәйҙер яңы проект, мәҫәлән, Викидәрес асып, новатор уҡытыусыларҙың дәрестәрен шунда һалып, тәжрибә уртаҡлашып булмаймы?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Был инде уҡытыусыларҙың теләгенән тора. Әгәр новатор-уҡытыусылар үҙҙәренең оригинал дәрес алымдарын интернетҡа урынлаштырырға уйлаһа, Викитека тигән проект бар. Шулай уҡ Викиәсбап тигәне лә бар, унда ҡуйғанда инде, новатор уҡытыусының дәресен артабан тағы ла кемдер байыта, өҫтәй, тулыландыра аласаҡ.

**▸ Википедияның, мәҡәлә мотлаҡ баҫма сығанаҡта донъя күргән булырға тейеш, тигән ҡәтғи принцибы, бәлки, дөрөҫ тә түгелдер, сөнки ниндәй генә халыҡты алып ҡарама, уларҙа диалекттар бар. Әммә тел рәсми ҡабул ителгән әҙәби тел нигеҙендә үҫешә, ләкин периферия бит диалектта аралаша. Әгәр шул диалекттарҙы күтәрмәһәк, ғүмеребеҙҙең ахырынаса һүҙлектәр етмәйенсә, һүҙҙәр таба алмайынса ҡаңғырмаҫбыҙмы? Икенсенән, халҡыбыҙҙың ауылда йәшәгән күп өлөшө фольклор ижад итеп, фольклор менән йәшәй. Уларҙың ниндәйҙер өлөшө әле яҙып та алынмаған, теркәлмәгән дә булыуы ихтимал. Тимәк, фольклор ижады бар икән, уның Википедияға инергә лә хаҡы бар?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Википедияның бишенсе принцибы - ошо биш принциптан башҡа ҡағиҙәләр үҙгәртелә ала, ти. Шуға беҙгә әйтелгән абруйлы сығанаҡҡа ғына баҫым яһамаҫҡа, ә шул мәғлүмәттәрҙе күтәреү өсөн халыҡ мәғлүмәттәрен дә тупларға кәрәк. Мәҫәлән, бер студент ҡыҙ ауыл тарихы тураһындағы мәҡәләгә ауылының тирә-яҡтағы топонимик атамалары тураһында үҙенең йыйған фольклор материалдарын өҫтәне.

**Зөфәр СӘЛИХОВ:** Минең фекерем башҡасараҡ. Әгәр һәр

мөмкинлектәре тураһында барҙы. Беҙҙең нимәнелер көрәшеп, яулап алыу ҡанға һеңгән. Интернет селтәрендә, интернет киңлегендә бер нәмәне лә яулап алырға кәрәкмәй, унда үҙ өлөшөбөҙҙө индереү үҙебеҙҙән тора. Быға бер кем дә ҡамасауламай, бер кем менән дә тартҡылашыу, көрәшеү, талашыу талап ителмәй.

Википедияны ҡурсалаған глобаль фонд - "Викимедиа Фаундэйшн" (Wikimedia Foundation) шундай идеология алып бара: кешелек йәмғиәте туплаған барлыҡ мәғлүмәт һәр милләттең теленә тәржемә ителергә һәм асыҡ, ирекле ҡулланыуҙа булырға тейеш. Шулай итеп, башҡа милләттәрҙең мәғлүмәтен һәм мәҙәниәтен һәр кем үҙенең туған телендә өйрәнһә, белһә, ул халыҡтарҙың телен өйрәнеү теләге лә тыуасаҡ.

**Зөфәр СӘЛИХОВ:** Конференцияла ике секцияға бүленеп эшләнек. Мин Викимедианы туған телгә тәржемә итеү буйынса мастер-класта ҡатнаштым. Рөстәм Башҡорт Википедияһының презентацияһын үткәрҙе. Израилдән килгән бер белгес - Әмир Элиша Аһурани минең Башҡортостандан икәнде белгәс: "Һеҙҙең илегеҙҙең баш ҡалаһы - Өфө, Оренбург башҡортса Ырымбур, Саратов - Һарытау, Самара Һамар була", - тип, саф башҡортса һөйләп аптыратты. Ул 20-ләгән тел белә икән. Башҡорт телен дә өйрәнгән. Башҡорт Википедияһы мәғлүмәттәрен дә апаруҡ ҡына белә булып сыҡты. Ул үҙе Мәскәүҙә тыуған, русса яҡшы белә, Викимедиа фондында БДБ илдәрендәге Викиберләшмәләрҙең мәнфәғәтен яҡлай. Программа,

дәүләт парламенты депутаты ла бар. 10 томлыҡ русса һәм ҡаҙаҡса баҫылған "Ҡаҙаҡ энциклопедияһы" редакцияһы үҙенең материалдарын Википедияла баҫтырыуға рөхсәт иткән һәм быны юридик яҡтан нығытып ҡуйған. Ҡаҙаҡтар ошо энциклопедия мәҡәләләрен үҙгәртеп, әммә йөкмәткеһен һаҡлап ҡалып, Википедияға урынлаштыра алалар. Ләкин Википедияның тәүге принцибы шундай: автор материалдарын күсереп ҡуйырға ярамай. Уны икенсе төрлө һүҙбәйләнештәр менән бер аҙ үҙгәртеп ҡуйырға мөмкин. Ҡаҙаҡтарҙа шул мәҡәләләрҙе әҙерләү менән 60 кеше шөғөлләнә. Беҙҙә бындай команда юҡ, әлбиттә.

***✓ Был проекттар менән шөғөлләнеүҙең маҡсаты - ошо эшкә күп халыҡты йәлеп итеү, телебеҙҙең ҡулланыу даирәһен арттырыу. Икенсенән, халҡыбыҙ мәғлүмәтен һәм мәҙәниәтен донъя кимәленә еткереү.***



кемгә, фекерегеҙҙе яҙығыҙ, тип ирек бирә башлаһаҡ, нимә килеп сығасаҡ? Шуға тәүҙә ул кеше мәҡәләһен ниндәйҙер баҫмала, мәҫәлән, район гәзитендә, баҫтырырға тейеш, һуңынан ғына Википедияға ҡуя ала, һылтанманы гәзиткә яһай.

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Бына википедиясылар араһында ла төрлө фекерҙәр барлыҡҡа килде. Күптән түгел БДУ-ла демография буйынса конференцияла булдым. Бик матур сығыштар яңғыраны. Ошо сығыштарҙы, курс эштәрен, рефераттарҙы Викитекаға оригиналь текст итеп ҡуйып булыр ине, тип уйланым. Был курс эштәрен бит абруйлы уҡытыусылар, ғалимдар тикшергән. Был үҙе үк мәртәбәле сығанаҡ.

**▶ Хәҙер электрон мәғлүмәт саралары үҫешә, был мәктәп һәм юғары белем биреү системаһын юҡҡа сығармаҫмы? Сөнки бер заман интернет аша башҡорт балаһы Америкала ултырып та башҡорт класында уҡый алыуы ихтимал бит. Тап шул ваҡыт еткәндә Башҡорт Википедияғыҙ, йәки баҫма вариантта эшләргә буламы?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Тап шулай икән, тип раҫлай алмайым, әммә минең төҫмөрләүемсә, мәғлүмәт бер урында ғына тупланмай. Уның базалары донъя буйынса төрлө урындарҙа урынлашҡан. Викимедиа фонды шуның өсөн төҙөлгән дә инде. Ул ошо базаларға матди ярҙам күрһәтә, уларҙың сығымдарын ҡаплай. Хатта ки аҡса түләп эшләткән белгестәре лә бар. Һәм бөтөн донъянан йыйылған иғәнә аҡсаларына базаны ҙурайтып бараларҙыр, тием.

**Зөфәр СӘЛИХОВ:** Википедияның ҡағыҙ вариантына килгәндә инде, ундай проект бар. Мәҫәлән, интернет барып етмәгән илдәргә Википедияны яҙҙырып, бушлай китап итеп таратып бирергә, тигән проект эшләнгән. Рус Википедияһы был проектты PDF-форматта сығара. Бының өсөн уны матурлап, шартына килтереп эшләргә кәрәк. Ә әлегә беҙҙең Башҡорт Википедияһын ябай ғына итеп ҡағыҙға сығартып алыу мөмкинлеге бар.

һәм бей (администратор һәм бюрократ - был статустар донъя кимәлендә шартлы рәүештә алынған) дәрәжәһе бирҙе лә ҡуйҙылар. Шулай итеп, Башҡорт Википедияһын үҙем төҙәтеп, эшләй башланым. Киң мәғлүмәт сараларына мөрәжәғәт менән сыҡтым. Рәхмәт "Йәшлек" гәзитенә, "Мәскәү башҡорттары" сайтына, ныҡ ярҙам иттеләр.

**Зөфәр СӘЛИХОВ:** Мин сайтта Рөстәм Нурыевтың, Башҡорт Википедияһына килегеҙ, тигән саҡырыуын күреп килеп ҡушылдым. Сайттың эсе буш, уҡырлыҡ мәҡәләләр юҡ ине, тип әйтерлек. Шунан яҙыша башланым. Мәҡәләләрҙе башҡортса календарҙарҙан йә энциклопедияларҙан алып, үҙгәртеп ҡуя торғайным. Рус теленән дә тәржемә иттем. Аҙаҡтан төрлө тарафтарҙан - Ҡытайҙан да, Көньяҡ Американан да, беҙҙең халыҡ йәки ҡала тураһында үҙ телегеҙҙә шундай мәҡәлә ҡуйығыҙ, тип яҙа башланылар. Шулай яҙыша торғас, артабан инде хаким статусы алдым.

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Википедиялағы хаким менән бей дәрәжә-

### ИҒТИБАР! ВИКИБӘЙГЕ!

Википедияның Викикитапхана бүлегенә тәүгеләрҙән булып башҡорт телендә 1001 әкиәтте күсереп ҡуйыусыға батырҙар бүләге - бер һарыҡ! Бының өсөн түбәндәге шарттарҙы үтәү зарур: күсерелгән әкиәттәр ҡабатланмаҫҡа һәм мотлаҡ категориялар буйынса системаланырға, мотлаҡ башҡортса булырға тейеш. Еңеүсене билдәләү өсөн бәйгеселәрҙең теркәлеүе кәрәк.

Икенсе урын алыусыға - 2500 һумлыҡ бүләк тапшырыласаҡ. Өсөнсө урынға - "ҡойроҡһоҙ сысҡан" (төрткө - беспроводная мышь).

**Әммә милләтебеҙ өсөн иң ҙур бүләк шул буласаҡ - башҡорт телендәге әкиәттәрҙе бар донъя беләсәк! Бәйгегә рәхим итегеҙ!**

**гән, ә Башҡортостанда был йәһәттән эштәр нисек бара?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Конференцияға барыр алдынан БР Премьер-министры урынбаҫары Салауат Тәлғәт улы Сәғитовҡа инеп, хәл-торош буйынса мәғлүмәт бирҙем. Ул, тәҡдимдәр көтәбеҙ, тине. Хәҙер барлыҡ булған осрашыуҙар, һөйләшеүҙәр, фекер алышыуҙарҙа яңғыраған тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алып, форумда тупланған уй-фекерҙәрҙе берләштереп, тәҡдимдәр әҙерләйем. Киләсәктә, Алла бойорһа, ярҙам булыр, тип ыша-

# АЯҠ БАҪАБЫҘ...

## донъя менән идара итә

**һын үҙегеҙ нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Википедиясы булараҡ, нимәнелер инҡар итергә яратмайым. Шуға традицион белем биреү системаһы бөтәсәк, тимәйем. Әгәр инде ул ысынлап та бындай кимәлгә үҫешеп етһә, нисек булырын тормош, ваҡыт үҙе күрһәтер. Әммә шуны һис шикләнмәй әйтә алам: виртуаль уҡыу, белем алыу - бер нәмә, осрашып, аралашыу - бөтөнләй икенсе. Унһыҙ булмай, сөнки кеше матди материянан ғына тормай, ауранан, йәндән тора. Интернет әлегә күңел, йән яҡынлығын тапшыра алмай. Викимедиа фондының унлаған проекты араһында Викиуниверситет, йәғни асыҡ университет та бар. Бер заман беҙ ҙә ул проектты үҙләштереү кимәленә барып етербеҙ һәм ул саҡта инде Ер шарының teләһә ҡайһы мөйөшөндә теләгән бер кеше, башҡортмо ул, икенсе милләтме, башҡортса өйрәнә, башҡорт класында уҡый аласаҡ.

**▶ Заманса технологияларҙы алып ҡарағанда ла, хатта кеҫә телефондарында смс-хәбәрҙәр күберәк килеп, хәтер базаһы тулһа, ул артыҡ мәғлүмәтте ҡабул итмәй. Википедияла ла мәғлүмәт базаһы тулып китеп, тупланған мәғлүмәткә юғалыу хәүефе янамаймы? Шулай уҡ ҡаты дискта булған бөтөн мәғлүмәтте лә юйҙырыу ысулдарын уйлап табып ҡына торалар, шуға күрә Википедияны ҡа-**

**▶ Аллаһы Тәғәлә һәр ғәмәлгә сәбәп бирә. Башҡорт Википедияһына миллион ярым самаһы башҡорт араһынан тап иң тәүгеләр булып барып инеүегеҙ, тимәк, юҡтан түгел. Башҡорт Википедияһына нисек килеп юлығыуығыҙ ҙа гәзит уҡыусыларға ҡыҙыҡ булыр, моғайын.**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Мин Википедияға 2006 йылдың ғинуарында осраҡлы ғына барып эләктем. Уға тиклем рус Википедияһында яҙыштым. Шулай бер ваҡыт яҙышып ултырҙым-ултырҙым да, туҡта әле, һул яҡтағы исемлектә Башҡорт Википедияһы юҡмы икән, тип ҡараһам, бар булып сыҡты. Унда 50-ләп мәҡәлә яҙылған. Шунан Рус Википедияһы аша уның администраторын эҙләй башланым. Миңә кемде эҙләргә икәнен күрһәттеләр, Унтифлер тигән татар телле егет ине ул. Шунан Унтифлерҙың "ишегенә ҡаға" башлағас, ул Яңы Зеландияға ниндәйҙер стюартҡа (Википедиялағы иң юғары дәрәжәле кеше) хат яҙған да, уныһы минән һорап та тормай, миңә хаким



ләре бер ниндәй ҙә өҫтөнлөк бирмәй, киреһенсә, уларға күберәк бурыстар ғына йөкмәтелә. Һәр хәлдә, мин хаким менән бей статусындағы кешеләрҙе йорт таҙартыусы, иҙән һепереүсе, туҙан һөртөүсе, ғөмүмән, баҡсалағы сүпте утаусы итеп күрәм.

**▶ Бөгөн төрки телле Википедиялар араһында ҡаҙаҡтар тәүге урынды биләй. Улар үҙҙәренең Википедияһына ниндәй өмөт бағлай?**

**Зөфәр СӘЛИХОВ:** Ҡаҙаҡтарҙың Википедияһы дәүләттәрендә милли ҡаҙаныш тип иғлан ителгән. Википедиялағы булған мәғлүмәт бына-бына ЮНЕСКО тарафынан халыҡтарҙың мәҙәни ҡомартҡыһы булып таныласаҡ, тиҙәр. Сөнки "Викимедиа фаундэйшн" башҡа проекттарҙы түгел, Википедияны ғына ЮНЕСКО-ға ошо исемлеккә индерергә тәҡдим итә. Был уның үҙенсәлегенә бәйле. Әгәр Википедия тотош шундай танылыу тапһа, тимәк, беҙҙең Башҡорт Википедияһы ла танылыу табасаҡ.

***Ҡаҙаҡтарҙың Википедияһы дәүләттәрендә милли ҡаҙаныш тип иғлан ителгән. Википедиялағы булған мәғлүмәт бына-бына ЮНЕСКО тарафынан халыҡтарҙың мәҙәни ҡомартҡыһы булып таныласаҡ, тиҙәр. Сөнки "Викимедиа фаундэйшн" башҡа проекттарҙы түгел, Википедияны ғына ЮНЕСКО-ға ошо исемлеккә индерергә тәҡдим итә. Был уның үҙенсәлегенә бәйле. Әгәр Википедия тотош шундай танылыу тапһа, тимәк, беҙҙең Башҡорт Википедияһы ла танылыу табасаҡ.***

**▶ Татарстан Республикаһында интернет-ресурстар буйынса хөкүмәт кимәлендә бер нисә ҡарар ҡабул ителнам.** Бындай мөһим эш йәмәғәт башланғысында ғына тормошҡа ашырылырға тейеш түгел.

Был проекттар менән шөғөлләнеүҙең маҡсаты - ошо эшкә күп халыҡты йәлеп итеү, телебеҙҙең ҡулланыу даирәһен арттырыу. Икенсенән, халҡыбыҙ мәғлүмәтен һәм мәҙәниәтен донъя кимәленә еткереү. Һәм был эштә битараф булмаған, ҡәләм тота белгән һәр кем ҡатнашырға, ә инде республика етәкселеге беҙгә ярҙам итеп ебәреүҙе үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Минең фекерем шундай.

**▶ Сәфәрҙән ниндәй уй-фекерҙәр төйнәп ҡайттығыҙ?**

**Зөфәр СӘЛИХОВ:** Башҡорт милләтен таныта торған мәғлүмәттәр башҡа милләттәрҙең Википедияларында ла булырға тейеш, тигән ҡарарға килдек. Шул турала һөйләшеп килештек. Мәҫәлән, беҙ сахалар, ҡырғыҙҙар тураһында мәғлүмәт ҡуясаҡбыҙ, улар - беҙҙең хаҡта.

**Рөстәм НУРЫЕВ:** Стратегик яҡтан ҡарағанда, иң төп фекерем шул: халҡыбыҙға донъя кимәлендә эшләгән проекттар хаҡында аңлатыу эштәре алып барыу ваҡыты етте. Был йәһәттән киң мәғлүмәт сараларының өлөшө ҙур булырға тейеш.

**▶ Һуңғы ваҡытта башҡорт теленең ҡулланыу даирәһе көнкүреш кимәлендә генә ҡалып бара, тигән фекерҙәр йыш ишетелә...**

**Рөстәм НУРЫЕВ:** "Викимедиа фаундейшн"да тап ошоно - милли телдәрҙе һаҡлап ҡалыу идеологияһын алға һөрәләр ҙә инде. Донъяла был йүнәлеште, был тәғлимәтте яҡлаусы проекттар бихисап. Бына ошо проекттарҙың барыһын да башҡорт теленә өйрәтергә була. Ә өйрәтеү өсөн ниндәйҙер ҙур көс, белгестәр кәрәк. Һәм бер нисә генә кеше түгел, тотош милләтте күтәреү зарур. Милләт үҙенең телен Википедия кеүек проекттарға сығарып, уның ҡулланыу даирәһен арттырһа, беҙ донъя кимәленә күтәреләсәкбеҙ.

Башҡорт телен ҡулланыу даирәһе кәмене, тиеү, бәлки, дөрөҫ тә түгелдер, сөнки һуңғы йылдарҙа интернет селтәрендә бихисап башҡортса сайттар барлыҡҡа килде. Беҙ бергәләп башҡорт телебеҙҙе үҙ ҡәүемебеҙ араһында йәки Рәсәй киңлектәрендә генә түгел, донъя кимәлендә тәҡдим ителгән проекттарҙа ҡулланырға, башҡорт халҡы тураһында донъялағы бөтөн милләттәргә белдерергә тейешбеҙ. "Викимедиа фаундейшн" барлыҡ халыҡтар, шул иҫәптән башҡорт халҡы өсөн дә шундай мөмкинлектәр тыуҙырған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн беҙ индустриаль быуаттан мәғлүмәт быуатына аяҡ баҫабыҙ - мәғлүмәткә эйә кеше генә донъя менән идара итәсәк һәм мәғлүмәтле милләт кенә кире һәм ыңғай, насар һәм яҡшы, хәүефһеҙ һәм хәүефле мәғлүмәт араһынан үҙенә файҙалыһын айырып ала аласаҡ, артабан үҫешәсәк. XXI быуат башында нигеҙ һалынған Башҡорт Википедияһы ла, Викимедиа ҡарамағындағы төрлө проекттар ҙа тап ошо йүнәлеште күҙаллай ҙа инде.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Бер милләт кешеләре полиэтник мөхиткә, йәғни күп милләтле урынға эләкһә, эске стереотиптар, ҡан хәтере ҡалҡып сыға. Был күренеште шулай уҡ Японияла йәшәгән башҡорттарҙа ла күҙәтергә була.*



АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**Беҙҙең башҡортта, килен кеше иренең ир туғандары, айырыуса ҡайныһы алдында үҙен бик тә әҙәпле тоторға тейеш, тигән борондан килгән ҡағиҙә йәшәй. Килен кеше ҡайныһы алдында "эйе", "юҡ"тан башҡа, артыҡ һүҙ һөйләргә, уға хатта күтәрелеп ҡарарға ла тейеш түгел, тигәне лә бар ул ҡағиҙәләр араһында. Кейәү менән ҡәйнә араһындағы мөнәсәбәттә лә яҡынса шулайыраҡ яҙылмаған ҡағиҙәләр бар. Үҙем бала саҡта, хәтерләйем, оләсәйем ихатаға сығыр алдынан "Ишек алдында кейәү йөрөмәйме икән?" тип, тәүҙә әсәйемде "разведка"ға сығарып, белешеп ала торғайны. Әгәр атайым ихатала йөрөһә, уның йә өйгә ингәнен, йә иһә эшкә киткәнен түҙемһеҙлек менән көтөп алғас ҡына ихатаға сыға ине.**
**Элегерәк, Таңһыҡбикә исемле килене тары бутҡаһы бешергәс, "Таңһыҡҡа тары бутҡаһы ла ярай инде ул", тип, уны-быны уйламай, бик тә ихлас һөйләнеп ашап ултырған ҡайныһына: "Ярпылдап ултырған Ярулла ҡартҡа ла килешә ул", тип әйткән килен тураһындағы мәҙәкте ишетеп үҫкәнбеҙ бит инде. Килен менән ҡайны араһында осраҡлы ғына килеп сыҡҡан шундайыраҡ ҡайһы бер көлкөлө хәлдәр беҙҙең дәүерҙә лә булғылап тора. Ҡайһы берәүҙәрен иҫләп ҡалып, хатта мәҙәк итеп тә һөйләйҙәр беҙҙең яҡтарҙа.**




## "Әһә, попался!.."

Хажиәхмәт олатайым оло улы Райманға килен алып биргән. Райман ағайым еңгәй менән ишек алдында шаярышып, йәшенмәк уйнап йөрөйҙәр икән. Йәштәр - йәштәр инде. Күп тигәндә, егерме бер-егерме икешәр йәш булғандыр уларға. Ағайым ҡайҙалар йәшенгән арала Хажиәхмәт олатайым ишек алдындағы бәҙрәфкә ингән. Әлбиттә, эстән бикләнгән. Йәш килен ҡайныһының бәҙрәфкә ингәнен абайламай ҡалған, әммә бәҙрәф ишегенең ябылып бикләнгән мәлен күреп ҡалған. Шунан Рәбиғә еңгәм, хәләл ефете шунда йәшенгән икән тип уйлап, йүгереп килеп, "Әһә, попался!" тип, бәҙрәф ишегенең тыштағы келәһен элә һалған. Ул ғына ла түгел, ишекте ҡапыл да аса алмаһын өсөн тыштан бүрәнә менән терәтеп тә ҡуйған был. Шунан оло эш атҡарған кешеләй, ҡулдарын ҡаушырып, туалет янында "һаҡҡа" баҫҡан да, бик ҡәнәғәт йылмайып тора икән. Райманы ҡасан ишекте дөбөрҙәтеп, үҙен сығарыуын үтенә башлар тип, көтә лә көтә икән. Ә эстән тауыш-тын ишетелмәй. Хажиәхмәт олатайым килененә тауыш бирергә унайһыҙланып ултырған да ултырған бәҙрәф эсендә. Ун биш-егерме минуттан һуң Райман ағайым, түҙмәй, бесәнлектә йәшенеп ятҡан еренән килеп сыҡҡан. "Нишләп мине эҙләмәй, туалет янында ҡатып ҡалдың?" тигәнгә, еңгәм албырғап киткән: "Ә бәҙрәфтә кем һуң?.." тип аптыраған һәм иренең "Әлләсе..." тигәнен ишеткәс, оятышынан ни эшләргә белмәй, өйгә йүгереп инеп киткән. Эстә бикләнеп ултырған Хажиәхмәт олатайым ни уйлағандыр инде был ваҡытта, унаһы беҙгә мәғлүм түгел...

## "И-и-и, бәпесем..."

Фәтхулла олатай иң өлкән улына килен ала. Бер йылдан ейәндәре тыуа. Баланың балаһы балдан да татлы була, тигәндәй, олатайым да кескәй Рәсихты бик ныҡ ярата. Хатта килене имеҙгән саҡта ла, килеп, ейәнен һөйөп китә икән. Әклимә еңгәм уның һайын уңайһыҙланып, икенсе яҡҡа әйләнеп ултырырға тырыша... Шулай бер мәл, Фәтхулла олатайым ҡайҙалыр оҙағыраҡ йөрөштөрөп килеп, өйгә ингәндә килене Рәсихын имеҙеп ултыра икән. Олатайым яратҡан ейәненең янына бармай түҙәме ни! Имеп ултырған баланың ҡабарып ҡына торған сикәһенә, иркәләп, "боть-боть..." тип төртөп тигәнсә, бала, имеүенән туҡталып, әсәһенең түшенән башын алған. Оло кеше быны ҡапыл да абайламайыраҡ ҡалған һәм ейәненә төҙәлгән һуҡ бармағы килененең асыҡ ҡалған түшенә барып төртөлгән: "боть-боть..."

## Памперсмы, сникерсмы...

Илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, барыбыҙ ҙа белеүебеҙсә, магазиндарҙа, аптекаларҙа элек беҙ ишетмәгән-күрмәгән һәр төрлө сит ил исемдәре йөрөткән әйберҙәр күбәйеп китте. Телевизорҙан берәй фильм ҡарарға ултырыуың була, йә памперсҡа реклама яһ-айҙар, йә сникерс, йә тампакска... Уларҙың нимәгә тәғәйенләнгән әйбер икәнен олораҡ кешеләр тәүҙә белеп тә бөтөрмәгәндәр инде. Бер ваҡыт Рәфҡәт ағайымдың да тәүге ейәнсәре тыуҙы. Бала өсөн аптеканан һәр саҡ памперс һатып ала башлаһаң, барлыҡ эш хаҡың тик шуға ғына китәсәк. Шуға ла, аҡса тәләфләмәү ниәте менән Гөлнур килен памперс һымаҡ нәмәләрҙе һәр төрлө марля, сепрәк-сапраҡтан күбеһенсә үҙе әтмәлләй ине. Шулай бер мәл, марляларҙы төргөләп, үтекләй торған ерҙәрен үтекләп, тегә торған урындарын теккеләп, килен кеше памперстар яһап ултыра икән. Ҡайныһы Рәфҡәт ағай, пенсионер кеше, ҡулдарын артҡа ҡуйып, эш менән мәшғүл килене тирәһенән унда-бында үткеләп йөрөй, ти. Бер аҙҙан, һүҙ юҡта һүҙ булһын, тигәндәй, ихлас ҡына итеп һорап ҡуя: "Килен, тампакс әҙерләп ултыраһыңмы?.." Ундай-бындай һүҙҙәрҙә ҡапыл да буталған мин дә быға әллә ни иғтибар итмәгән булыр инем, әгәр ҙә килен ҡысҡырып көлөп ебәрмәгән булһа...

## Түш йөнө икәнен белмәгән

Ғәйфулла ағайым менән Фәйрүзә еңгәмдәрҙең оло килене Әлмира үҙенең уңғанлығы менән күптәргә өлгө булырлыҡ. Әле үҙҙәренең айырым фатиры булмағанда улар ҡайнылары менән бергә йәшәп торҙолар. Ҡәйнәһенең ҡулына эш тә тейгеҙмәй торғайны Әлмира килен. Бер йәй көнө шулай ҡайны менән ҡәйнә ҡайҙалыр ҡунаҡҡа барырға булған. Матур итеп үтекләнгән йоҡа күлдәген кейеп алған Ғәйфулла ағай менән Фәйрүзә еңгә өйҙән сығырға йыйына икән. Ҡайныһы менән ҡәйнәһен ҡәҙер итә белгән Әлмирә килен ҡайныһының да өҫ-башын ҡаҡҡылап, рәтләштергән була, ти. Ғәйфулла ағайҙың күлдәгенең түше тапҡырында оҙон сәс йөбешеп торғанын күргәс, уныһын да алып ташламай булдыра алмай уңған килен. Әммә теге сәс йөбешеп торған ерҙә тора бирә икән. Икенсе тапҡырға уҡталып, сәсте нығыраҡ итеп тартыу менән ҡайныһы ауыртынған кешеләй ҡысҡырып ҡуйған. Быны күреп, ҡәйнәһе көлөп ебәргән: "Ҡайныңдың түшендә үҫкән сәс бит ул, килен. Күлдәгенән үтә сығып торған икән шул..." Әлмира килен ҡайныһының түше йөнлө икәнен, әлбиттә, белмәгән...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ ЙӘШӘГӘН...

## башҡа халыҡтарҙы ла өйрәнәйек

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Фәриҙә ҒӘЛИЕВА, филология фәндәре докторы, тарих фәндәре кандидаты:**
Башҡортостан күп милләтле республика булараҡ, ғилми яҡтан әлегә бик аҙ өйрәнелгән. Күсеп килгән халыҡтарҙың мәҙәни үҙенсәлектәре тикшеренеүҙәр талап итә. Төрлө милли мәҙәниәттәрҙең үҙ-ара бәйләнеше фәнни күҙлектән ҡаралыуҙы көтә. Ошо йәһәттән дөрөҫ, объектив фекер булмау ҙа төбөктәге дейөм мәҙәни үҫеште тотҡарлауы ихтимал, йәмғиәттә хаталы ҡараштар тыуып, милләт-ара ғына түгел, социаль киҫкенлек тә барлыҡҡа килеүе мөмкин. Мәсәлән, республикалағы урыҫтар, уларҙың мәҙәниәте яңы ғына өйрәнелә башланы. Башҡорт мәҙәниәте үҫешенә урыҫтар ыңғай йоғонто яһаған, тигән бер яҡлы ҡараш йәшәне. Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың урыҫтарға ҡарата йоғонтоһо тураһында әйтелмәне. "Өлкән ағай" килгән дә "ҡусты"һын аяғына баҫтырған, белемле, мәҙәниәтле иткән, тигәнерәк фекер бик оҙаҡ йылдар халыҡ аңына һеңдерелә килде. Ә бит урыҫ халҡының хужалыҡ итеүен, матди һәм рухи мәҙәниәтен тикшергәндә бик күп нәмәне башҡорттарҙан үҙләштергәнен күҙәтергә була. Йылҡысылыҡты ғына алайыҡ. Урыҫ ауылдарына экспедицияларға сыҡҡан ваҡытта урындағы халыҡ һаман булһа, аттарҙы, йылҡысылыҡты башҡорттан да яҡшы белгән кеше юҡ, тип һөйләй. Йәғни, мәҙәниәттәр һәр ваҡыт үҙ-ара аралашып, бер-беренен байыта.

Республикала, башҡа төбәктәрҙән айырмалы, халыҡтарҙың традицион мәҙәниәте юғалыуҙан һаҡланып ҡалған. Мәҙәни үҙенсәлектәрҙең сиктәрен юйыу сәйәсәте алға һөрөлгәндә, донъяла глобаллашеү барғанда беҙҙә мәҙәниәттәр, киреһенсә, янырыу кисергән. Әйтәйек, Дыуан районында элекке тормош-көнкүреше менән йәшәгән бер нисә урыҫ ауылы бар. Шулай уҡ украин, латыш, немец ауылдарын атап үтергә була. Күптән түгел урындағы украиндар башҡарған йырҙарҙы яҙып алғайныҡ. Украинанан килгән ғалимдар, беҙҙә был йырҙарҙы инде күптән йырламайҙар бит, тип хайран ҡалды. Тимәк, бәләкәй генә төркөмдән торған бер милләт кешеләре полиэтник мөхиткә, йәғни күп милләтле урынға эләкһә, эске стереотиптар, ҡан хәтере ҡалҡып сыға. Был күренеште, әйтәйек, Канадалағы украиндарҙа ла, шулай уҡ Японияла йәшәгән башҡорттарҙа ла күҙәтергә була.

Шул уҡ ваҡытта халыҡ үҙ милләтен ултырған урыны менән бәйләп атаусан. Мәсәлән, беҙҙә йәшәгән белорус халҡынан, милләтегеҙ буйынса кемһегеҙ, тип һораһаң, улар үҙҙәрен белорустар түгел, ә башҡорт белорустары, ти. Латыштар, немецтар ҙа үҙҙәрен шулай билдәләй.

Өфө ғилми-тикшеренеү үҙәгенең Раил Кузеев исемендәге этнология институты нәҡ башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеү маҡсатында асылғайны. Әммә хәҙер бында республикалағы башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәте лә өйрәнелә. Сөнки айырым бер халыҡтың психологияһын, донъяһын белер өсөн башҡа милләттең мәҙәниәтен өйрәнеү мотлаҡ.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

ЗАУЫҠ

*Зифҡәт СӘЙЕТҒӘЛИЕВ*

# БЕРГӘ ЙӘШӘР ӨСӨН ОСРАШМАНЫҠ,

## Айырылышыр өсөн табыштыҡ...

### Һуңға ҡалып килмәнемме һиңә?

Мин иртәрәк, ә һин һуңыраҡ
тыуҙың,
Ә шулай ҙа килеп табыштыҡ.
Юҡ, ваҡытлы килдек беҙ был ергә,
Бик ваҡытлы килеп таныштыҡ.

Һуңға ҡалып килмәнемме һинә,
Ә иртәрәк нисек килергә?
Иртә килеү кәрәк ине микән,
Быны ҡайҙан, нисек белергә?

Үҙ-үҙемә шундай һорау бирәм,
Үҙ-үҙемдән яуап эҙләйем.
Һорауҙарҙа, яуап эҙләүҙәрҙә
Ни мәғәнә барын белмәйем.

Мин иртәрәк, ә һин һуңыраҡ
тыуҙың,
Ә шулай ҙа килеп табыштыҡ.
Юҡ, ваҡытлы килдек беҙ был ергә,
Бик ваҡытлы килеп таныштыҡ.

* * *

Беҙ торабыҙ шулай юл ситендә
Бер кем алмай, бер кем туҡтамай.
Аҙашҡандар юлда кемгә кәрәк,
Яҙмыш ундайҙарҙы хупламай.

Юл буйҙары аҙашҡандар менән,
Һаташҡандар менән туп-тулы.
Рәхәтлекте ташлап китеүеме,
Эҙләүселәрҙеңме был юлы?

Беҙ ҙә һинең менән бына шулай
Юл ситендә ғүмер итәбеҙ.
Биткә туҙан һибә уҙғынсылар,
Ә беҙ шунда яҙмыш көтәбеҙ.

Күҙҙәреңдән, биттәреңдән үбәм,
Ҡулдарыңды тотоп ҡулыма.
Күтәрҙем дә һине букет итеп
Алып сыҡтым ғүмер юлыма...

* * *

Мин яратҡан ҡайын урмандарға
Мөшләк үҫкән, таҡыр яландар.
Күҙем төшеп йөрөгән ҡыҙҙары ла
Әле генә ҡайҙа булғандар?

Һандуғаслы тандар ҡайҙа булған,
Ҡайҙа беҙ юраған яҙмыштар?
Барыһы ла әллә ҡайҙа булған,
Ҡайҙа дуҫтар, ҡайҙа таныштар?

...Бары бында, бер ни үҙгәрмәгән,
Болон тулы бында сәскәләр.
Һандуғас та сут-сут килеп һайрай,
Ҡыҙҙар йыры тулған иртәләр.

Тик барыбер йөрәгемә ятмай,
Ишетмәйем ҡоштар йырын да.
Һүҙҙәре бер, әммә моңо - башҡа,
Икенсерәк төҫлө таңы ла.

Был башҡалар ере,
Был башҡалар иле,
Беҙҙең ил дә, ер ҙә юғалған.
Йәшлегебеҙ әллә ҡайҙа ҡалған,
Кире ҡайтмаҫ булып урланған.

Ә шулай ҙа бик-бик ҡайтҡы килә
Шул замандың матур таңына.
Ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскә йыйырмын мин,
Наҙҙарымды биреп тағын да.

Әйҙә, дуҫым, пускай һөйләһендәр,
Сәйнәһендәр майын сығарып.
Ә беҙ ҡайттыҡ, әйҙә, ун етегә
Көнләшкәндәр ҡалһын сыуалып.

* * *

Йөрәмә бында бутап уйҙарымды,
Баш ҡатырып эргә-тирәмдә.
Һинән башҡа ла бит баралмайым.
Була алмайым һинең менән дә.

Һине күрһәм - янам, һинһеҙ - туңам,
Яфам итеп таптым үҙемә.
Яҙмышымды ғына боҙоп ташлап,
Китмәһәңсе шулай ғүмергә.

Нимә кәрәк, ниңә өҙгөләйһең?
Әллә шулай ҡыҙыҡ табаһың...
Һин бит мине әле бер эҫегә,
Бер һыуыҡҡа алып һалаһың.

### Айырылышыр өсөн...

Әллә нисек килеп сыҡты әле,
Ҡайҙан килеп былай таныштыҡ?
Бергә йәшәр өсөн осрашманыҡ,
Айырылышыр өсөн табыштыҡ.

Тиҙ китерһең тиеп, күҙҙәреңдән
Үбеп ҡалырға тип уҡталдым.
Еҫтәреңдә хәтеремә һалып,
Иренеңдән утлы һут алдым.

Әйтмә миңә ҡасан китереңде,
Ашыҡһаң да, әйтмә дөрөҫөн.
Хыял донъяһында йөрөйөмсө,
Минең менән һин дә йөрөрһөң.

Ҡайҙан килеп былай осраштыҡ беҙ,
Ҡайҙан килеп былай таныштыҡ?
Йөрәй әрней - йәшәр өсөн түгел,
Айырылышыр өсөн табыштыҡ.

* * *

Ул - минеке, мин уныҡы түгел,
Тигән һүҙҙе һәнем теләмәй.
Ә бит яҙмыш беҙҙән һорап тормай,
Нисек теләй, шулай өҙгөләй.

Беҙ йомғағы диңгеҙ уртаһының -
Ҡайҙа алып китер тулҡындар?
Уҫал елдән сүллек ҡалмаҫ микән
Йөрәктәрҙә ҡупҡан ялҡындан?

Таяныс та һиңә булалманым,
Бар ауырлыҡ һинең иңеңә.
Ҡаршы тора алырһыңмы икән
Өҙгөләгән яҙмыш еленә?

Түҙемле һәм матур фәрештәм һин,
Хайран ҡалам ҡайсаҡ көсөңә.
Һин булмаһаң, батып ҡалыр инем
Был болғансыҡ диңгеҙ эсенә.

### Әйҙә, киттек хыял донъяһына...

Әйҙә, киттек хыял донъяһына,
Хыял донъяһында керәйек.
Бер-бер(е)беҙҙе шунда ғына көтөп,
Шунда ғына килеп күрәйек.

Ишектәре уның һәр саҡ асыҡ,
Һуңға ҡалдың һинә, тимәҫтәр.
Ниңә тегеләй ҙә былай, тиеп,
Һиңә төпһөҙ һорау бирмәҫтәр.

Ул донъяла һин үҙеңә хужа,
Нисек кәрәк, шулай эшләрһең.
Кемдә кәрәк, шуны яратырһың,
Кемде кәрәк, шуны эҙләрһең.

Ул донъяны үҙең уйлағансы,
Үҙең теләгәнсә ҡорорһон.
Кәрәк икән - уңға, кәрәк - һулға,
Ҡайҙа кәрәк - шунда борорһоң.

Әйҙә, киттек хыял донъяһына,
Хыял донъяһына керәйек.
Бер-бер(е)беҙҙе шунда ғына көтөп,
Шунда ғына килеп күрәйек.

### Һинең тыуған ерҙәреңдә булдым

Ҡайттым бөгөн һинең менән бергә
Йәшлегемдең матур яҙына.
Был шиғырым һинең тыуған ерҙә
Күкшел ташҡа ултырып яҙыла.

Яҙҙың шулай матур бер көнөндә
Килдем һинең тыуған яҡтарға.



Бала саҡтарыңды эҙләп килдем,
Йөрәгемә һалып һаҡларға.

Һаумыһығыҙ, матур Урал ере,
Ауылыңдың ғорур тауҙары.
Һаумы, һөйгәнемдең бала сағы,
Тауҙар йылғаһының шаулауы.

Кескәй генә ҡыҙҙың тәпәй баҫҡан
Һуҡмаҡтарын шунда күҙләнем.
Еләклетау битләүендә ҡалған
Һинең бала саҡты эҙләнем.

Күреү менән йөрәгемә һалдым
Тау биттәрен, Урал инешен.
Ҡыҙығыҙҙы үтә ныҡ яраттым -
Һеҙҙең ерҙең татлы емешен.

Хыялдарҙа йәшлектәргә ҡайтып,
Минең менән бергә йөрөйһөгөҙ.
Кемде миңә бүләк иттегеҙ һеҙ,
Гүзәл яҡтар әле белмәйһегеҙ..

Һинең тыуған яҡтарыңды күргәс,
Бала саҡҡа ҡайттым бөгөн дә.
Яратыуым хыял ғына булып
Ҡалмаҫ микән Урал ерендә?

### Әйт кенә миңә...

Кәрәк икән әгәр һинең өсөн,
Янған уттан күмер алырмын,
Ялан усым менән утҡа инеп,
Уттан эҫе булып янырмын.

Салауаттың күперҙәрен күккә
Кәрәк икән һиңә һуҙырмын.
Һин торған ер дымға сарсай ҡалһа,
Ямғыр булып унан уҙырмын.

Кәрәк икән әгәр һинең өсөн,
Янып торған шиғыр булырмын.
Әйт кенә һин миңә бер генә һүҙ,
Шағир булып тағы тыуырмын.

Кәрәк икән әгәр һинең өсөн,
Уралтауҙан алтын табырға.
Тауҙар аҡтарырға әҙермен мин
Һинең янда мәңге ҡалырға.

Кәрәк икән әгәр һинең өсөн,
Баҫыу сәскәләре булырмын.
Алдарыңа ялан булып ятам,
Ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскә йыйырһың.

Кәрәк икән әгәр һинең өсөн,
Һағынышып ғүмер үтергә,-
Һуҡмағыңда һары умырзая
Булып әҙермен мин үҫергә.

Кәрәк икән әгәр һинең өсөн,
Йәшлегемә кире ҡайтырмын.
Ҡышын ҡарҙар булып яуырмын да,
Яҙын сәскә булып атырмын.
Тик әйт кенә миңә...

### Ҡәҙерлем

*Ниңә йырсы ҡоштар илдән киткәс,*
*Моңдан яҙып ғүмер һөрәләр,*
*Һәм ни өсөн тик ғашиҡтар ғына*
*Көпә-көндөҙ йондоҙ күрәләр?*
*Мостай Кәрим.*

Ҡәҙерлем һин минең, алтыным,
Ай алдына килеп балҡының...
Хәтереңдәме, көндөҙ йондоҙ күрҙек,
Мин тапманым, ә һин күрһәттең.
Ифрат һирәк була торған хәлдән
Зиһенемде минең үҙгәрттең.

Урағайҙа ике йондоҙ ине.
Берене - алыҫ, бер(е)һе - яҡында.
Үҙебеҙҙе пар йондоҙға тиңләп,
Шиғыр яҙҙым һөйөү хаҡында.

Яҡын балҡығанын һиңә тиңләп,
Алыҫтағын юрап үҙемә,-
Йөрәгемә уйып яҙып ҡуйҙым,
Мәңге ҡалһын, тиеп, хәтерҙә.
Ҡәҙерлем һин минең, алтыным,
Ай алдына килеп балҡының...

# РӘХМӘТ!

## (Эссе)

Яҙ! Күҙ алдында күперелеп бәрхәт кеүек үләндәр ҡалҡа. Байрамса кейенеп-яһанып, етәкләшеп йәйгә китеп барған һылыу ҡайындар шыбыр-шыбыр серләшә. Сут-сут килгән парлы ҡоштарҙың - үҙ гәме, үҙ хәстәре. Тәбиғәттең кешелеккә йәшәү йәме, йәшлек сәме, бөхет өләшкән тәмле, татлы мәле. Көнләп түгел, сәғәтләп, минутлап, бер туҡтауһыҙ миҙгел үҫә, үҙгәрә - тормош яңыра. Оҙайлы ҡыштың биле ныҡ булһа ла, яҙ еңде. Ул - еңеүсе! Шуға күрә бар тереклек байрам итә, шатлана, ҡыуана, рәхмәт әйтә.

Бигерәк матур төбәктә йәшәйбеҙ бит. Ҡара әле, ҡыҙарып сыҡҡан ҡояшҡа ҡара! Көн тыуа... Ниндәй хыял, өмөттәр менән ҡаршылайһың яңы көнөңдө? Ә уның байығанын ҡарап торһаң, әллә күпме картина яҙып булыр ине - һуштан яҙҙырырлыҡ төҫтәр балҡышы!

Аҡыл менән аңларлыҡ түгел был үҙгәрештәрҙе. Кеше уны нисек бар, шулай ҡабул итергә генә һәләтле, әгәр күрә, тоя белһә, әлбиттә.

Ғәйрәте ташып торған дәртле яҙҙа тыуған хистәрем тураһында яҙмай булдыра алмайым, яҙам. Мин шундай бәхетлемен! Донъям теүәл: мыш-мыш килеп ике бөркөтөм - игеҙәктәрем Фәнил менән Фәнис йоҡлай. Уларҙы йоҡлатам тип, эргәләренә ятып торған атайҙары ла әүен баҙарына киткән. Ә мин төнгө иламһи тынлыҡта яҙ тынын тойоп, яҙ һулышын тыңлайым. Келт-келт итеп сәғәт йөрөй. Эй йөрөй, эй йөрөй, әммә ғүмере буйы үҙенән йыраҡ китә алмай, үҙ күсәрендә әйләнә лә әйләнә.

Тормош та шулай кешеләрҙе әйләндерә лә әйләндерә: өй - эш, өй - эш. Яҙын да, йәйен дә, көҙөн дә, ҡышын да кешеләр шул ике сиккә ашыға: иртән - эшкә, кис - өйгә. Күбеһе шул ике арала аҙашып, сығыр юл эҙләй-эҙләй, ғүмерҙәренең үткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Ғүмер үтәме, беҙ шул ғүмерҙән үтәбеҙме?

Ниңә әле шундай уйҙарға биреләм? Ят та йоҡла бит инде. Сәғәт төнгө өс тулып уҙған. Юҡ, йоҡо килмәй. Ниндәй рәхәт, тынлыҡтарым ҡанғансы яҙыша алам, уйҙарымды үҙ ағышына ебәреп, бер ҡайҙа ла ашыҡмай, тынлыҡты тыңлай алам.

Мин бик бәхетлемен! Донъям түңәрәк: яратҡан эшем, йән атып торған кешем бар, ҡәҙерле әсәйем һәм туғандарым бар, туған телем, тыуған ерем, Башҡортостан исемле сал тарихлы илем һәм халҡым бар. Бар нәмәм бар! Юҡ, мин был ергә ғүмер үтһенгә килмәгәнмен, әйҙә, ул тормош үҙе үтеп торһон, ә мин йәшәйем әле! Йәш ай ҙа тулып бара, минен дә әле тулған айҙай түп-түңәрәк сағым. Нәҡ йәшемдең уртаһы: әҙме-күпме тупланған аҡыл, тәжрибәмде барлап, киләһе быуын кешеләре лә аңларлыҡ телдә яҙырға теләк тыуған саҡ. Йәшәүемдә мәғәнәле иткән хыялдарымдың бер-бер артлы тормошҡа ашып торған сағы. Минең был ерҙә бер генә эшем ҡалды: рәхмәт әйтергә өйрәнеү. Эйе, эйе, яңылышманым: рәхмәтле булып йәшәргә өйрәнеү. Шул ябайлыҡта икән бар бөйөклөк.

Уйлап ҡара: һинең был ергә килеүең осраҡлы хәлме? Юҡ, сөнки кемдер һинең тыуыуыңды бик ныҡ теләгән, көткән һәм, аңға ла һыймаҫлыҡ мөғжизә булып, һин тыуғанһың. Хатта шуның өсөн генә лә минут һайын рәхмәт әйтеү ҙә аҙ!

Һин үҫкәндә күпме ҡаршылыҡтарға осраның? Уларҙың һәр береһенә бәрәмләп-бәрәмләп рәхмәт әйтәһеңме? Улар булмаһа, һин был яҡты донъяла еңеүсе булып, балҡып йәшәр инеңме?

Ә шатлыҡтарыңды йыш иҫеңә төшөрәһеңме? "Улар былай ҙа шатландырыр өсөн киләләр, нимәһенә рәхмәт әйтергә инде, эштәре шул бит!" Шулай уйлайһыңмы? Ә бит ул шатлыҡтарҙың һиңә килмәүе лә мөмкин ине - шуны онотма, рәхмәтле бул!

Ҡайғы шатлыҡ менән гел йәнәш йөрөй, улар йылғаның ике яры һымаҡ. Береһе - аҡ, икенсеһе - ҡара төҫтә, айырмаһы шунда ғына. Ҡайғыһына - рәхмәт: түҙемле, сабыр, кешелекле булырға өйрәтә. Шатлыҡ ихласлыҡ тәрбиәләй. Бигерәк тә икенсе кешенең уңыштарына ҡыуана белһәң.

Әй, кешем, яуҙыр бәрәкәтле ергә рәхмәттәреңде! Үҙеңдән һуң ерҙә бәрхәт кеүек йәшел үләндәр ҡалҡһын. Һылыу ҡайындар һиңә рәхмәт әйтә-әйтә, етәкләшеп, мәңгелеккә табан барһындар ҙа барһындар. Ярһыу йылдар арғымағында елгәндә, егәрле елдәр ергә рәхмәттәребеҙҙе еткерһен. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр. Кемдә тиһеңме? Һине түгел, әлбиттә, һин былай ҙа рәхмәттән генә туҡылғанһың, һинең ысын күңелдән әйткән бер рәхмәтең кешелекте мең бәләнән ҡотҡарыр. Йәлләмә! Яҙҙан, йәйҙән, көҙҙән, ҡыштан өйрән. Рәхмәт!

**Рәйсә БӘҘРЕТДИНОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЗЫЯНЫ ЛА БАР... заман технологияһының

■ Компьютер һәм төрлө күнегеүҙәр оло йәштәге кешеләрҙә йыш осраған хәтер насарайыу хәүефен 75 процентҡа кәметә. Аризоналағы Майо клиникаһы медиктары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 70-93 йәштәге ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат ҡатнаша. Анкетаға уларҙың һуңғы йылдарҙағы йәшәү рәүешен сағылдырыусы һорауҙар ҙа инә. Тиҙ атлап йөрөү, йәйәүле туризм, аэробика, көс талап ителә торған күнегеүҙәр, гольф уйнау, йөҙөү, теннис, йога, һуғыш сәнғәте һәм ауыр атлетика кеүек спорт төрҙәре менән шөғөлләнеүселәрҙең хәтере күпкә яҡшыраҡ булыуы асыҡлана. Шулай уҡ карттарҙың заман технологиялары ҡаҙаныштары, анығыраҡ әйткәндә, компьютер менән ҡулланыуы ла хәтер функцияһының түбәнәйеүенә юл ҡуймай икән. Һорау алыуҙа 1000 оло кеше ҡатнашҡан. Компьютер менән ҡулланмаусы ҡарттарҙың 20,1 процентының хәтере нормаль тип табылған, 37,6 процентында еңел формалағы хәтер насарайыуы күҙәтелгән. Ә компьютер ҡулланыусы һәм даими рәүештә күнегеүҙәр яһаусыларҙа был айырма 36 процентҡа 18,3 процент тәшкил иткән.

■ Донъяла бик абруйлы һаналған Forbes журналы эксперттары иң файҙалы аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Организм өсөн иң кәрәкле аҙыҡ итеп ҡурай еләге, көртмәле һәм ер еләге табылған. Еләктәрҙә май юҡ, улар витаминдарға, антиоксиданттарға бай. Был продукттар иммунитетты нығыта һәм яман шештәрҙе булдырмай. Икенсе урында сәтләүектәр һәм ҡуҙаҡлылар тора. Артабан баш мейеһенә, йөрәк эшмәкәрлегенә яҡшы тәьҫир иткән балыҡ тора. Брокколи һәм пекин кәбеҫтәһе организмдан токсиндарҙы сығара, һарымһаҡ менән һуған иммунитетты күтәрә.

■ Японияның Тояма университеты ғалимдары мунса менән сауנаның йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ғына түгел, кешенең кәйефенә лә яҡшы йоғонто яһауын асыҡлаған. Британияның New Scientist журналында баҫылған тикшеренеү һөҙөмтәләренән күренеүенсә, аҙнаһына 5 тапҡыр 15 минутлап мунсаға йәки саунаға барыу йөрәк һәм ҡан тамырҙарын нығыта. Бындай терапия йөрәктең ҡан ҡыуыу һәләтен яҡшырта, кеше физик көсөргәнешкә сыҙай башлай. Өҫтәмә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тән температураһы күтәрелеү һөҙөмтәһендә баш мейеһенең нейрондары эшмәкәрлеге әүҙемләшә, ул "бәхет гормоны" серотонин бүленеүе өсөн яуаплы. Тимәк, мунса яратыусыларҙың кәйефе яҡшы була, үҙҙәрен яҡшыраҡ тоя, уларҙың үҙ-үҙенә ҡуйған баһаһы юғарыраҡ була. Мунса тын алыу юлдары ауырыуҙары ваҡытында ла файҙалы, иммунитетты ла нығыта, тирене таҙарта, ябығырға булышлыҡ итә.

■ АҠШ белгестәре аллергияның яңы төрөн теркәгән. Wi-Fi үткәргесһеҙ селтәргә булған аллергия билдәләре башҡа аллергия төрҙәренән бер нәмәһе менән дә айырылмай. Уны икенсе төрлө электромагнит тулҡындарына артыҡ һиҙгерлек (Electromagnetic hypersensitivity) тип йөрөтәләр. Баш ауыртыуы, быуындар һыҙлауы, күҙҙәрҙең ҡороуы йәки йәшләнеүе, тамаҡ ҡымырйыуы - ошо билдәләр менән табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр арта бара. Улар менән һөйләшкәндән һуң, ауырыуҙарҙың Wi-Fi зонаһында күп ваҡыт уҙғарыуы асыҡланған. Бында барыһы ла был үткәргесһеҙ селтәрҙең микротулҡынлы мейес менән бер тулҡында эшләүе сәбәпсе. Заман технологияларының зыянлы тәьҫиренән һаҡланыу өсөн табиптар йышыраҡ тәбиғәткә сығырға кәңәш итә.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ЙЫЛАН МАЖАРАЛАРЫН...

## тарих итеп һөйләргә генә ҡалмаһын ине



### Үҙ балаларынан ҡурҡалар, имеш...

Йыландың холҡо төрлө саҡта төрлөсә була. Әгәр йыланды ҡыраз таш өҫтөндә ҡыҙынып ятҡан саҡта бимазалаһаң, уның асыуы килә. Ундай саҡта ул һине үҙенә яҡын килтермәҫ өсөн әсе итеп сыйылдап, һыҙғыра. Ирәндектә сейә тиргән мәлдәрҙә барыһы дүрт йыланға осраным мин. Улар миңә бик яҡын ғына ине, яҡынлашыуымды күреп, тауыш бирҙеләр. Бер метр-метр ярым ара ҡалһа, артабан барып булмай, ә сейә тирге килә, шулай ҙа эстән генә "Ғәфү ит", тиһең дә, был урындан тайыу яғын ҡарайһың.

Беҙ, малайҙар, 1954 йылдың июль айында "Тарзан" фильмын ҡарағандан һуң, Төпкөл урманында ағастарға арҡан бәйләп, ағастан-ағасҡа һикерәбеҙ. Байтаҡ ҡына уйнаныҡ, хатта тәндәрҙе күгәртеп бөттөк. Һыҙланышып, ҡайтыу яғына ыңғайланыҡ. Мал йөрөгән һуҡмаҡ буйлап бер йылан шыуыша, үҙенең балалары ҡойола-ҡойола бара. Нәҙек кенәләр, оҙонлоҡтары унар сантиметрҙай булалыр. Балаларын шулай тыуҙырғас, йылан һуҡмаҡтан боролоп, үләндәр араһына инеп юғалды. Белеүемсә, йылан балаларынан мөмкин тиклем алыҫҡараҡ ҡасырға тырыша. Сөнки әсәһенең тәненә йәбешһә, балалары уны кимерергә керешәсәк. Шуға ла йыландың балалары тыуғас та һәр береһе айырым көн күрә.

### Арбау көстәре бармы?

Йәшенә, тоҡомона ҡарап, йыландарҙа арбау һәләте төрлө кимәлдә үҫешкән булыуы мөмкин, тиҙәр. Беҙҙең яҡтарҙағы ҡара, һоро һәм сыбар йыландарҙың башҡа төр йыландарға, әйтәйек, тауҙа һәм һыуҙа йәшәүсе йыландарҙыҡына ҡарағанда арбауы ла көслөрәк. Миңә ике мәртәбә йыландың нисек итеп йомарланып ҡына ҡуҙғалмай ятҡан килеш ҡорбанын һағалап, тамағын туйҙырыуын күрергә тура килде. Улар сысҡан ояһына яҡын ғына урында уралып, бер ниндәй хәрәкәтһеҙ ята һәм, бына ғәжәп, оя эсендәге һәм яҡын тирәләге сысҡандар ниндәйҙер бер көскә буйһоноп, йыландың ауыҙына үҙҙәре үк килеп керә.

### Тағы бер һәләте

Был һәләте тәбиғәткә ҡулайлашырға ярҙам итә йыланға. Ул һәләт унда башҡа йәнлектәргә һәм кешегә ҡарағанда ла нығыраҡ үҫешкән, ул да булһа - ҡышҡы йоҡоға талыу. Хәл былай булды: атай менән әсәй, малды үтә ныҡ ҡәҙерләгәнгә күрә, ҡыш тыуған һарыҡ бәрәстәрен өй эсендә ҡоролған ситлек эсендә тота ине. Беҙ, бала-саға, көнөнө ике мәртәбә бесән индереп һалабыҙ бәрәскә. Бер көн кәбән төбөндә туңып ятҡан ҡара йылан бесән менән ҡуша өйгә ингән булған. Таң менән кәрәсин шәмен тоҡандырып, тышҡа сығып индем. Быймамды сискән арала ни күрәм: кис һалған бесәнебеҙ араһынан йылан килеп сыҡты ла, мейес артына инеп тә юғалды. Шунда уҡ атайымды уятып, күргәндәремде һөйләп бирҙем. Аайым салбарын, фуфайкаһын, бейәләйен кейеп алғас, тәртешкә менән мейес артындағы йыланды муйынынан эләктереп алып, кәртә яғына ебәрҙе. Үҙе: "Яҙ етеп, көндәр йылынғас, урманға үҙе китә ул. Бесән индерһәгеҙ, бүтән ҡарап индерегеҙ", - тип һөйләнә-һөйләнә сәй ҡайнатыр, картуф бешерер өсөн усаҡлыҡҡа ут тоҡандырып ебәрҙе. Йыландың шундай сыҙамлы булыуы уны башҡа йән эйәләренән өҫтөнөрәк итә. Тағы шул: йыланды ни тиклем генә ҡыҫһаң , баҫһаң да, улар баҫымға бирешмәй. Белеүемсә, йыландар һыуҙы аҙ эсеү арҡаһында ҡышты еңел үткәрә. Улар һыуҙы һирәк һәм бик аҙ эсә. Октябрь-ноябрь айҙарында һыу эсеүҙе бөтөнләйгә туҡтата улар. Шулай ҙа ҡандарында һыу составы кәмемәй, уныһы йыландарҙың беҙ белмәй торған бер мөғжизәһе булып ҡала. Йыланға ул ваҡытта һауалағы һыу быуҙары ла етә, тиҙәр.

### Йылан "туйы"

1954 йылдың май аҙағы. Дамир ағайым менән ауыл малын көтәбеҙ. Көндөҙгө сәғәт 11 тирәһендә малды Шәһиттәр тауындағы Ялтыр күл яғына ыңғайлатып китеп барабыҙ. Мин көтөү алдына сығып, алға ныҡ сыҡҡан малдарҙы ҡайырыңҡырап, туҡтатып барам. Бер саҡ нимәгәлер тау һыртында үҫкән селектәргә иғтибар иттем. Унда аяҡтарын һуҙып, үрғуян йоҡлап ята. Кешеләр һөйләүе буйынса, ҡуянды ҡапыл ҡурҡытһаң, йөрәге шартлап, үлә, имеш. Мин оҙон сыбыртҡы менән һуҡтым да тегегә, бөтә көскә ҡысҡырам. Ҡуяным селектән дә бейегерәк һауаға ырғыны ла, ергә төшөп тә етмәҫтән, аяҡтары менән һауала "саба" башланы, малай! Хас та "Дисней" йәнһүрәттәрендәге кеүек... Минең "наҙлап" уятыуыма 4-5 секунд та үтмәне, шешҡолағым тауҙы аша төшөп, Йәшел туғайына ҡарай сапты... Үҙемдең ахмаҡлығыма көлә-көлә тегенең артынан йүгерәм. Бер саҡ граждандар һуғышы ваҡытында һәләк булған һалдаттар күмелгән ҡәберлеккә барып юлыҡтым. Өс соҡорҙоң береһе ҙур ғына ине. Был тирәнән элек тә шөрләп кенә үтеп китә инек, бөгөн ни өсөндөр шул соҡорға күҙ һалып китергә булдым. Ҡараһам, йылан туйы бара! Йөҙәрләп кенә барҙарҙыр, моғайын! Ҡайһылары арҡан һымаҡ үрелгән. Нескә генә тауыш менән сыйылдаған тауыштары ишетелеп тора... "Бәләһенән баш-аяҡ", тип, малдар яғына йүгерҙем.

### Хикмәтме был?

2002 йылдың июль аҙаҡтарында 15 йәшлек Салауат улым менән Ирәндектең Күсем ташы аҫтында бесән саптыҡ. Улымды 4 сәғәт саптырам да, ял итергә ебәрәм. Ул ҡурай еләге, сейә, муйыл тиреп ашай, тәбиғәтте күҙәтә. Бер көн киске сәғәт һигеҙҙәр тирәһендә эшемде туҡтатып, аҫҡы туғайыбыҙҙа ултырған транспорт янына китеп барам. Юлдың ике яғында ла муйыл уңған, шуларҙы ашай-ашай атлайым. Бер ваҡыт юлды арҡыры сығып барған бер ҙур йыланды күреп ҡалдым да туҡтаным. Ул, моғайын, ҡая таштарҙа ҡыҙынып, шунда тамағын туйҙырған да, үҙе йәшәгән төбәккә - һыу буйына төшөп баралыр, тип уйланым. Миңә боролоп ҡарай-ҡарай күҙҙән юғалды. Мин уға: "Ғәфү ит мине, бесән эшләргә кәрәк бит, һин миңә бәлә-ҡаҙаһыҙ бесән эшләргә ярҙам ит", - тип өндәштем. Был тирәләге йыландарҙың иртәнге ундарҙа ҡыраз таштарға йылынырға килеүен, ә кис етә башлаһа, йәғни 6-8-ҙәрҙә үҙәктәге йылға буйындағы тал, муйыл үҫкән төйәктәренә кире ҡайтыуҙарын белә инем. Иртәгәһенә үлсәгес алып барып, билдәләгән урынды үлсәп ҡараным. Йыландың оҙонлоғо 184 сантиметр булған!

Әйткәндәй, бесәндән ҡайтып еткәс, ҡатыным бер һөйөнөслө яңылыҡ менән ҡаршы алды. Мин был яңылыҡты ишетеп, ҡыуандым һәм бесәнлектәге теге йыланға теләк теләүем хәтергә төштө...

### Тик ҡайҙан табырға уларҙы?

Йыландарҙан һаҡланыу сараһы ябай ғына. Улар йылҡы малының тир еҫен яратмай. Шуға күрә кем тәбиғәт ҡосағына ҡыуыш ҡора, яҡын-тирәлә йыландар барлығын белһә, йоҡлай торған урынын дилбегә, йүгән менән уратып ҡуя, был йыландан һаҡлаулы булаһың, тигән һүҙ. Мин үҙем гел генә шулай итәм. Шулай ҙа хәҙер, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һаҡланыр өсөн йыландар ҙа ҡалмай бара шул. Һуңғы йылдарҙа, үткән быуаттың 40-60 йылдары менән сағыштырғанда, йыландар күпкә кәмене беҙҙең яҡта. Шулай уҡ башҡа йәнлектәр ҙә һиҙелерлек әҙәйҙе. Йылайыр, Бөрйән райондарында был хәл бик үк күҙәтелмәһә лә, Баймаҡта ныҡ һиҙелә. Бының төп сәбәбе, минеңсә, тәбиғәттең кеше тарафынан ныҡ бысратылыуы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йыландарҙың юғала барыуына ҡарап, кешелектең киләсәген уйлайым да, хафаға ҡалам: тәбиғәтте файҙаланғанда баҙар иҡтисады ҡанундарынан азат була алмауыбыҙ уйландыра бит әле. Был мәҡәлә үткәндәрҙе хәтергә төшөрөп, үҙебеҙҙең асылыбыҙ тураһында уйланыуҙарҙан сығып яҙылды.**

**Самат БИКБИРҘИН.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**
**(Аҙағы. Башы 19-сы һанда).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТӘҺӘРӘТ НУРЫ

**Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) артынан барыусылар дини йолаларҙы үтәүҙе Аллаһы Тәғәлә менән яҡынайыу һәм уның менән аралашыу мөмкинлеге тип ҡараған. Йолаларҙы үтәү минуттары улар өсөн иң ҡәҙерлеһе булған, был ғәмәлдәренән күңелдәрен бер тулҡынға көйләп, тыныслыҡ, бәхет кисергәндәр. Хоҙайға табыныуҙы ҡабатланмаҫ шатлыҡ тип ҡабул иткәндәр һәм быныҡ өсөн Аллаһҡа рәхмәт уҡығандар. Улар һәр ваҡыт тәһәрәттә - ритуаль таҙалыҡта булырға тырышҡан.**

Бер ваҡыт иртәнге сәғәттә Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ янына Билалды (радиаллаху анху) саҡырып: "Ниндәй ғәмәлең өсөн һин ожмахҡа минән иртәрәк индең? Төшөмдә йәннәткә китһәм, һинең аяҡтарыңдың тауышы ишетелә. Үткән төндә мин йәнә ожмахҡа ингәйнем, һәм ҡабат һинең аҙымыңды ишеттем", - тигән. Билал (радиаллаху анху) әйткән: "О, Аллаһ илсеһе! Аҙан ҡысҡырғандан һуң мин һәр ваҡыт ике рәкәғәт намаҙ уҡыйым. Тәһәрәтем бөтһә, намаҙ ваҡытын көтмәйенсә, йәнә йыуынам. Тәһәрәт булғас, ниңә тағы ике рәкәғәт намаҙ уҡымаҫҡа, тип уйлайым һәм йәнә намаҙ ҡылам".

Сәхәбәләрҙең береһе Әбү Хөрәйра (радиаллаху анху) тәһәрәт алғанда ҡулдарын йүрыныңа тиклем йыуа торған булған. "Был ниндәй тәһәрәт?" тип һорағандарға ул шулай яуап ҡайтарған: "Рәсүлуллаһ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән һүҙҙәрҙе ишеттем. Ул былай тигәйне: "Киәмәт көнөндә мөъминдең нуры, йәғни мөъмин тәнендәге нур, тәһәрәт алғанда һыу ҡайҙа тиклем барып еткән, шул урынғаса етеп яҡтыраса҈".

Сәхәбәләр Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), өммәтендә булыусыларҙы нисек танышаҡһың, тип һораған. "Күҙ алдына килтерегеҙ, берәүҙең маңлайы һәм аяҡтары аҡ төҫтә булған аты бар, ти. Үҙ атын хужаһы ҡара йылҡылар араһында танымаясаҡмы ни? Тимәк, имандаштарыбыҙҙың йөҙҙәре, тәһәрәт алғанға күрә, нур менән яҡтырып тораса҈. Аяҡ-ҡулдарында ла нур буласаҡ. Үҙ йылғама иртәрәк килеп, бүләктәр таратыр өсөн уларҙы көтөп торасаҡмын. Иғтибарлы булығыҙ. Ҡайһы бер кешеләрҙе фәрештәләр йылғамдан ҡыуып торасаҡ. Дөйә көтөүенән сит дөйәне ҡыуған кеүек. Сөнки улар Аллаһ күрһәткән юлдан ситләшкән буласаҡ", - тип яуаплай Бәйғәмбәр (саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм).

**Әхмәт ТАҺИР.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# РӘЖӘБ АЙЫ БАШЛАНА

**22 майҙан 1433 һижри йылдың Рәжәб айы башлана. Рәжәб айы мосолмандарҙа һаңғырау ай булараҡ билдәле. Был айҙа Аллаһ бәндәләрҙең гонаһтары тураһында һорағанда, ишетмәмешкә һалыша, улар тураһында әйтеп бармай. Шуға ла был айҙағы игелектәре өсөн бәндәләргә Аллаһ үҙенең рәхмәт-бәрәкәттәрен яуҙырып ҡына тора.**

Рәжәб айының һәр көнө мосолман өсөн хөрмәтле, дәрәжәле һәм ҡәҙерле. Был айҙың һәр йома көнө лә башҡа айҙарҙағы йома көндәренән хөрмәтлерәк. Дин ғалимдары әйтеүенсә, мосолман йыл дауамында кәм тигәндә 14 тапҡыр ураҙала була. Шуның өсәүһе Рәжәб айына тура килергә тейеш. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Рәжәб айының башында, уртаһында, аҙағында ураҙа тотҡан кешегә Аллаһ ай буйы ураҙа тотҡандай әжер-сауаптарын бирер".

Рәжәб айының 26-һында, йәғни Миғраж кисендә ураҙаны дин ғалимдары йөҙ көн буйы ураҙа тотоуға, йөҙ төн буйы намаҙ уҡып сығыуға тиңләгән. Бәйғәмбәребеҙ: "Рәжәб - Аллаһтың үҙ айы, Шәғбан - минең айым, Рамаҙан - өммәтемдәгеләр айы", - тигән. "Бындай изге айҙарҙа дин бәндәне гонаһ эшләү сәбәпле күктәр яҙаһына юлыҡып, үҙенә-үҙе зыян килтереүҙән тыя, Аллаһ - тәҡүә мөъминдәр менән бергә", - ти.

Рәжәб айының тәүге йомаһына ҡаршы кис - Рәғәиб кисе атала. Рәғәиб кисе - Аллаһтың үҙ ҡолдары ҡылған доғаларҙы һәм тәүбәләрҙе күпләп-күпләп ҡабул итә торған мәлдәре.Беҙ белмәгән бик күп хикмәттәре булған өсөн дә мосолман кеше бындай кисәләрҙе ғибәҙәттә тороп үткәрә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Камиллыҡтың алтын асҡысы

Хәҙерге донъяның киң таралған "ауырыуҙарының" береһе булып арығанлыҡ тора. Кешеләр эшкә бара, унда көн буйына эшләй, кисен өйөнә ашыға, ашыҡ-бошоҡ тамағын туйҙыра ла телевизор пультын тотоп, диванға барып ауа. Ниндәйҙер мөһим эште эшләмәүҙе улар шундай һүҙҙәр менән аҡлай: "Йә, Хоҙай, мин шул тиклем арыным".

Ҡасандыр билдәле булырға, тормошто яҡшыға үҙгәртергә хыялланған кешеләрҙең хыялы хәҙер инде һирәг сәғәт йоҡлау. Йәмғиәт арыған граждандар менән тулған, уларҙың хыялын тормошҡа ашырырға ла, шулай итеп тормошон үҙгәртергә лә энергияһы юҡ. Моғайын, "арығанлыҡ ауырыуы"ның ябай иллюзия ғына булыуын белһәгеҙ, аптырарһығыҙ. Быны аңлар өсөн шундай картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: һеҙ эшегеҙҙә йәки өйөгөҙҙә ниндәйҙер күңелһеҙ документ уҡыйһығыҙ, был эш шул тиклем ялҡытҡыс, күҙҙәр йомола, арыта. Бер минут ҡына булһа ла ял итеп алғы килә. Шунан ҡапыл был шөғөлөгөҙҙө телефон шылтырауы йәки хеҙмәттәшегеҙҙең ҡапыл килеп инеүе бүлә. Һеҙҙең арығанлыҡ ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыға, үҙегеҙҙе ҡабат йәнле һәм дәртле итеп тоя башлайһығыҙ. Һәм һеҙ шуны асыҡлайһығыҙ: баҡтиһәң, һеҙ бөтөнләй арымағанһығыҙ, ә бары тик шул хәл-торошто шөғөлөгөҙ оҡшамаған өсөн генә уйлап сығарғанһығыҙ икән. Тағы шундый һығыҙ бар: кәрәкле эшкә иғтибар туплау һәләтенә бөтөнләй ғәҙәтләнмәгәнһегеҙ. Аңығыҙҙы тәртипкә өйрәтһәгеҙ, ул ысын мөғжизә тыуҙыра башлаясаҡ, аҡыл һәм аң арығанлыҡты үткәндәрҙә ҡаласаҡ. Арығанлыҡтың төп сәбәптәре - тыныс сыҙлыҡ һәм кире уйҙар. Тынысһыҙ аң организмға бер нисә саҡырым йүгереп үткәндәгегә ҡарағанда ла ҙурыраҡ арығанлыҡ тойғоһо килтерә. Бындай аңды 1000 вольтлы аккумулятор менән сағыштырырға мөмкин. Көндө ул тулыһынса зарядланған, энергия менән тулы килеш башлай. Артабан 100 вольт тұләнмәгән иҫәп-хисап өсөн уйланыуҙарға китә. 200 вольт хәҙер инде бер әһәмиәте лә булмаған ваҡиғаға ревизия яһауға сарыф ителә. Тағы 300 вольт шулай итеп үткәрергә теләгән, әммә быға мөмкинлегегеҙ булмаған ял тураһында хыялланыуға китә. Шулай итеп, барлыҡ энергия бөтә һәм һеҙ үҙ-үҙегеҙгә йонсоғандай, ял итергә тейешле кеүек күренәһегеҙ.

Аңдың арығанлығы менән көрәштә тәүге аҙым булып уйҙарығыҙҙы контролләү тора. Уйҙар тик ыңғай һәм оптимистик рухта булырға тейеш. Бынан һуң үҙегеҙгә һеҙҙә ҙур энергия резервы ятыуын һәм ул кемдәндер килеп кранды асыуын ғына көтөүен, арығанлыҡтың бары тик уйҙырма ғына булыуын һеҙдерегеҙ. Арығанлыҡ тураһындағы уйҙар башығыҙға килә башлау менән иғтибарығыҙҙы ҡулығыҙҙағы йәки эштәге предметка йүнәлтегеҙ. Марафонсының дистанция аҙағында икенсе һулышы асылған кеүек, һеҙҙең мейегеҙҙең дә икенсе һулышы барлыҡҡа килергә тейеш. Быны өсөн тәртипкә ғәҙәтләнеү мускулын көсөргәндереп, әлеге ваҡытта башҡарған эшкә йүнәлтегеҙ. Тәүҙә ауырыраҡ булыр, тиҙҙән тәртип инициативаны үҙ ҡулына алыр.

Кемдәр, уңыш, эш күнелгә ятмаһа ла, уңышһыҙлыҡ яратмаған эште лә ҙур ҡәнәғәтлек менән башҡара, тигән бит.

**Робин ШАРМА.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Ауырыу сәбәптәре

**Ҡайһы бер ауырыуҙарҙың һәм проблемаларҙың социаль сәбәптәрен барлауҙы дауам итәйек:**

- **Йөрәк** - ғәйеплелек тойғоһо, борсолоуҙар, һөйөү етмәүе, йыһан ҡанундарын аңламау һәм ҡабул итмәү; саманан артыҡ ашау, аҙ хәрәкәтләнеү, дөрөҫ булмаған һыу-тоҙ режимы (кремний етешмәүе).
- **Ашҡаҙан** - хәл-торошто йәки кемделер ҡабул итмәү; саманан артыҡ ашау, аҙыҡ-түлекте айырмай ашау (талымһыҙлыҡ).
- **Ашҡаҙан асты биҙе** - башҡаларҙан буйһоноулы булыу, көнсөллөк; иғтибар, таҙа һыу етмәү.
- **Бөйөрҙәр** - ҡурҡыу; организмдың шлакланыуы, шишмә һыуының етешмәүе.
- **Бауыр** - асыу; организмдың интоксикацияһы, паразиттар.
- **Үт ҡыуығы** - ярһыу, тормошта яңылыҡ булмауы (яңы энергиялар); интоксикация, һыуһыҙланыу.
- **Талаҡ** - күңел төшөүе, нектротик бәйләнештәр (эйәләшеү); гармонияның, тормоштоң тәбиғи ритмдары боҙолоуы.
- **Һуҡыр эсәк** - йыйылған асыу, үҙ-үҙенә яза биреү теләге (изоляция), асыу һаҡлау, килешә алмау.
- **Эсәктәр** - эҙмә-эҙлекле булмау, үткәндәргә йәбешеп ятыу; хәрәкәт етмәү (торғонлоҡ), саманан артыҡ ашау, паразиттар.
- **Бәүел ҡыуығы** - шикләнеүҙәр, икеләнеүҙәр, оҙайлы ҡурҡыу, тиҫкәрелек; һәпрәлек, вирустар, стафилококктар булыуы.
- **Ҡатын-ҡыҙҙың енси ағзалары** - ир-атҡа ҡарата агрессия, ижади энергияны ҡулланмау (аналыҡ - ижад итә, ә түллек биҙе - ижади энергия сығанағы), нәҙәкәтлелекте юғалтыу; тәбиғәттең тере, таҙа, тәүсығанаҡтан булған энергияһы етешмәүе.
- **Ир-аттың енси ағзалары** - ҡатын-ҡыҙға ҡарата агрессия, сирҡаныусанлыҡ, иғтибар юҡлығы.
- **Умыртҡа һөйәге** - дөрөҫ булмаған тормош принциптары, көсһеҙ ихтыяр, үҙ-үҙенә ышанмаусылыҡ; тоҙ ултырыу, сколиоз, дискыларҙың шылыуы һәм деформацияһы.
- **Остеохондроз** - фекерләүҙә һәм хәрәкәттә һығылмалылыҡ булмауы, ҡатып ҡалыу; организмда дөрөҫ булмаған һыу-тоҙ һәм минераль баланс.
- **Тире проблемалары** - эске ҡәнәғәтһеҙлек, иғтибар етмәү, оят, үҙ-үҙең менән ҡәнәғәт булмау; бәшмәктәр, паразиттар, токсиндар.
- **Эске ағзаларҙың төшөүе** - йәшәү тонусын юғалтыу, ялҡаулыҡ; мускулдар атрофияһы, саманан артыҡ ашау, тиҙәк таштары.
- **Аяҡтар** - ялған принциптар, ялған юл; дөрөҫ булмаған һыу-тоҙ режимы, организмдың интоксикацияһы.
- **Ҡулдар** - кәрәкмәгән нәмәне һәм яңылыш эшләй; дөрөҫ булмаған һыу-тоҙ режимы, организмдың интоксикацияһы.
- **Ҡан** - шатлыҡ, бәхет юҡлығы, ҡәнәғәтһеҙлек (ҡанынды боҙоу); организмдың интоксикацияһы, структураланған һыуҙың етмәүе.
- **Нервылар** - эгоизмдан (ниңә шаулайһығыҙ, ниңә илай һәм Эгоның башҡа ризаһыҙлыҡтары), йыһан ҡанундарын ҡабул итмәү һәм аңламау; күҙәнәктәрҙең мәғлүмәт интоксикацияһы (шул иҫәптән телевидение аша).
- **Хәтер** - тормошҡа ҡыҙыҡһыныу юҡлығы (дәрескә, йөҙҙәргә, ваҡиғаларға); ҡабул итергә, анализларға, аңларға ялҡау килеү.
- **Аллергия** - нимәгәләр ҡарата агрессия (туҙанға, дарыуҙарға, сүп үләндәренә һ.б.); таҙа һыуҙың етешмәүе, токсиндарҙың күплеге.
- **Гипертония** - даими ҡәнәғәтһеҙлек белдереү, дәғүәләр, йыһан ҡанундарын ҡабул итмәү; ҡан тамырҙарында атеросклеротик ҡатламдарҙың ултырыуы, һыу етешмәү.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

## БАШ ЭШЛӘТМӘК




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**19-сы һандағы сканворд яуаптары:**
**Горизонталь буйынса:** Гвардия. Шайморатов. Дәрт. Кассета. Маршал. Анонимка. Ажар. Антитеза. Препарат. Свастика. Кусимов. Нафиҡов. Фиҙа. Зарурат. Әлибаев. Ҡам. Врач. Барокко. Кавалерист. Легионер. Люкс. Иҙел. Йотко. Йүгән. Йети. Акрил. Ағас. Разведчик. Айкан. Ниәт.
**Вертикаль буйынса:** Танк. Тәкәбберлек. Сафари. Көй. Алиби. Бронкс. Оран. Шашка. Автомашина. Алмас. Карнай. Гимнастика. Ралли. Лавсан. Тракт. Руанда. Тайра. Даян. Арпа. Лайка. Ватан. Нәзиров. Көрт. Ринг. Ручка. Иваси. Часовой. Ҡармаҡ. Андре. Актив. Трюм. Рами.

*ИҒЛАН*

# УҠЫРҒА САҠЫРАБЫҘ!



**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 2012 йылдың 22 июнендә 2012-2013 уҡыу йылына 7-се, 8-се кластарға уҡыусылар ҡабул итеү өсөн әңгәмәгә саҡыра.**

Әңгәмәлә ҡатнашырға теләүселәр үҙҙәре менән 1-се кластан башлап бөтә уҡыу йылдарының өлгәшеү табеле күсермәһен, тыуыу тураһында таныҡлыҡ (төп нөсхәһе һәм күсермәһе), бер шаҡмаҡлы, ике буй дәфтәр, ручка алып килергә тейеш.

Белем кимәлен тикшереү башҡорт һәм урыҫ телдәренән, математика һәм психологиянан тест һорауҙарына яуаптар рәүешендә уҙғарыласаҡ.

Гимназияның адресы: **Өфө ҡалаһы, Рәсәй урамы, 88-се һанлы йорт.**

Иҫкәрмә: Өфө ҡалаһында йәшәүселәр 8-11 кластарға уҡырға ҡабул ителмәй.

*ЙӘШЕЛ ДАУА*

## УҪАҠ

Уҫаҡтың (осина) кеше организмына файҙаһын һанап бөтөрлөк түгел. Бер яҡтан, уҫаҡ кешегә матди яҡтан ҙур ярҙам килтерһә, икенсе яҡтан, ул халыҡ медицинаһында иң ҡиммәтле дарыуҙарҙан һанала. Был ағас бөрөһөнән эшләнгән төнәтмә һыуыҡ үткәндән файҙалы, биҙгәк, пневмония һәм үпкәләр туберкулезынан ярҙам итә. Ошо уҡ төнәтмә менән цистит һәм башҡа бөйәр ауырыуҙарын дауалайҙар. Йәш ботаҡтарынан яһалған спиртлы төнәтмәне нейроревматизм булғанда ҡабул итәләр. Уҫаҡ бөрөһөнән ошондай төнәтмә яһарға мөмкин: ярты банка бөрө һалырға, тултырғансы араҡы ҡойорға. Төнәтмәне бер ай ҡараңғы урында тоторға.

Ололарҙа бөйәр ҡыуығы тотмау, подагра, ревматизм булғанда ошондай рецепт: көнөнә 3 тапҡыр бер стакан һыу менән 25-30 тамсы төнәтмә ҡабул итергә.

**Мигрень.** Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан бер сәғәт алда ошо төнәтмәнән бер балғалаҡ эсеү ярҙам итә.

**Мастопатия.** 2 литр һыуға 600 г уҫаҡ ҡабығы һалып, һүрән утта 2 сәғәт ҡайнатырға. Һыуытҡансы төнәтергә, һарҡытырға. Төнәтмәгә 0,5 л араҡы ҡойорға. Килеп сыҡҡан ҡушылманы 20 өлөшкә бүлергә. 20 көн рәттән ашарҙан ярты сәғәт алда ҡабул итергә.

**Нефрит.** Уҫаҡтың ботағын, япраҡтарын һәм ҡабығын 1 стакан һыуға һалып, төнәтмә яһарға. 10 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3-5 тапҡыр ярты стакан ҡабул итергә. 3-4 аҙнанан 10 көнгә тәнәфес яһарға, әгәр кәрәк булһа, курсты дауам итергә.

**Панкреатит.** 0,5 литр һалҡын һыуға 3 ҡалаҡ уҫаҡ ҡабығы һалып, 10 минут бешерергә. Һыуытҡансы төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда 1 ҡалаҡлап ҡабул итергә. Ошо уҡ ысул диабеттан да ярҙам итә.

## ЭТ ҠАРАҒАТЫ

Эт ҡарағатын (паслен черный) Англияла, Францияла, Португалияла, Төркиәлә, Венесуэла һәм башҡа илдәрҙә халыҡ медицинаһында киң ҡулланалар. Ә бына беҙҙең илдә был үҫемлек ниңәлер һирәк ҡулланыла. Эт ҡарағаты күп кенә сирҙәргә дауа булып тора. Уның яңы бешкән емештәренән бик тәмле ҡайнатма әҙерләргә мөмкин (1 кг емешкә 1 кг шәкәр). Билдәле булыуынса, эт ҡарағаты емеше күҙҙең күреү һәләтен арттыра, ә ҡайнатма оло йәштәгеләргә күреү һәләтен яҡшыртыу өсөн тәғәйенләнгән. Эт ҡарағаты япрағы төнәтмәһен үт ташы ауырыуынан, гепатиттан, баш ауырыуҙарынан, ревматизмдан ҡулланалар. Киптерелгән япраҡлы һәм сәскәле үренделәре цистит, гастрит, ҡурылдай астмаһы ауырыуынан, һыуыҡ үткәндән ҡулланыла.

Ҡурылдай астмаһы, ревматизм, гипертония, гастрит, цистит, йүтәл, тимерәү, тире ауырыуҙарын дауалау өсөн рецепт. Эт ҡарағатының япраҡтары һәм сәскәләре менән бергә киптерелгән үләнде иҙергә. Бер стакан һыуға бер балғалаҡ иҙмә һалып, һүрән утта 15 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр берәр балғалаҡ эсергә. Төнәтмәне һыуытҡыста 5-6 көн һаҡларға мөмкин.

Невроз, баш һәм ашҡаҙан ауырыуҙары, диатез, подагра, күрем ваҡыты боҙолоуы осрағында бер стакан ҡайнар һыуға 1 балғалаҡ үлән иҙмәһе һалып, сәй кеүек эсергә.

Яман шеш ауырыуҙары осрағында ярты стакан һыуға 1 ҡалаҡ йәшел емешле эт ҡарағатын һалырға. Һүрән утта 10-15 минут ҡайнатырға. Һыуынғас, һарҡытырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 15 мл ҡабул итергә.

Күп сирҙәрҙән дауа булып торһа ла эт ҡарағаты ағыулы үҫемлектәрҙән һанала. Бөйәр, ашҡаҙан аҫты биҙе ауырыуҙары яфалағанда һаҡ булырға кәрәк. Шулай уҡ уны гипотония, вегетатив-ҡан тамырҙары дистонияһы булғанда ҡулланырға ярамай. Тағы ла эт ҡарағатын ауырлыларға ҡулланыу ҡәтғи рәүештә тыйыла.

Рим ӘХМӘДОВ.

АФАРИН!

# БАШҠОРТ СӘСӘНИӘҺЕ...

## Төркиәне таң ҡалдырҙы!

**Сибай сәсәниәһе Асия Ғәйнуллина Девели ҡалаһында (Кайсери өлкәһе) билдәле төрөк шағир-импровизаторы Ашык Сейранизың (1800-1866) иҫтәлегенә арналған XXX Халыҡ-ара мәҙәниәт һәм сәнғәт фестиваленда ҡатнашты.**



Сара ЮНЕСКО-ның "Кешелектең тере ҡомартҡыһы" исемлегенә ингән ашыҡ Шереф Ташлыкованың сығышы менән асылды. Икенсе өлөштә Әзербайжан, Хакасия, Башҡортостан вәкилдәре үҙ һөнәрен күрһәтте. Асия Ғәйнуллинаның сығышы тамашасыларҙың алҡыштарына күмелде һәм уны сәхнәгә ҡабат-ҡабат саҡырҙылар. Фестиваль сиктәрендә ғилми-ғәмәли конференция ла үтте һәм унда сәсәниә импровизаторлыҡ сәнғәтенең үҙенсәлектәре менән таныштырҙы, шулай уҡ ул Эрзурум ҡалаһында төрки мәҙәниәте буйынса ойошторолған ғилми-ғәмәли конференцияла ла ҡатнашты.

Асия Ғәйнуллинанан тыш, был сарала Анкарала төрөк телен өйрәнеү курстарында белем алыусы М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт педагогия университеты студенты, йәш башҡорт шағиры Илдус Ҡаһарманов та сығыш яһаны.

**Әхәт СӘЛИХОВ.**

КИТАБЕННАС

# БЫЛ КИТАПТА...

## йәмғеһе 400 башҡорт халыҡ йыры!

**"Әлеге китапҡа индерелгән башҡорт халыҡ йырҙары беренсе тапҡыр башҡорттоң моң-көйҙәргә фантазияһының байлығын, уйлап сығарыуға, ижади импровизациялауға маһирлығын бөтә тулылығында күрһәтә, башҡорт халыҡ музыкаль телмәренең стилдәре һәм диалекттары тураһында йөкмәткеле мәғлүмәт бирә..."**




Былтыр З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Урал" хәйриә фонды ярҙамында сығарылған "400 башҡорт халыҡ йыры" китабының автор-төҙөүсеһе, ғалим-фольклорсы, сәнғәт фәндәре кандидаты Фәрит Камаев йыйынтыҡтың әһәмиәте хаҡында ошо һүҙҙәрҙе әйтеп ҡалдырған. Китаптың икенсе төҙөүсеһе - сәнғәт белгесе Ниғмәт Шоңҡаров.

"Йыйынтыҡтағы йырҙар һәм инструменталь көйҙәрҙең ноталары үткән быуаттың 80-се йылдарында уҡ эшләнгәйне. Үкенескә ҡаршы, авторҙарҙың ваҡытһыҙ вафаты арҡаһында китап нәшер ителмәй ҡалды. Китапты баҫмаға әҙерләүгә сарыф ителгән титаник хеҙмәттең ғәмәлгә ашмауы ла ихтимал ине: ноталар компьютерға һалынмағайны, тик пунсон ярҙамында ғына башҡарылғайны. Ниһайәт, йыйынтыҡты нәшер итеү мөмкинлеге тыуҙы, китаптың структураһын, төҙөлөшөн нисек булһа, шулай һаҡларға ҡарар ителде. Ноталар материалы бер аҙ камителһә лә, китаптың тәүге исеме, шулай уҡ йырҙар һәм көйҙәр нумерацияһы шул килеш ҡалдырылды", ти был китапты әҙерләүсе махсус мөхәррир, музыка белгесе Гүзәл Хәмитова.

Хәтерегеҙҙә булһа, бынан бер нисә йыл элек Мәжит Алкиндың "Башҡорттоң 100 йыры" тигән йыйынтығы баҫылды. Быға тиклем дә башҡорт халыҡ йырҙары текстары "Башҡорт халыҡ ижады"ның айырым томлыҡтарында донъя күргәйне. Ә был туланма башҡаларынан ни яғы менән айырыла һуң? Исеменән үк күренеүенсә, унда йәмғеһе 400 башҡорт халыҡ йырының һүҙҙәре һәм ноталары бирелгән. Уларҙың кем тарафынан, ҡасан, ҡайҙа, кемдән нисек яҙып алыныуы ла күрһәтелгән. Тупланмала халҡыбыҙҙың киң билдәле "Урал", "Буранбай", "Сибай", "Санды үҙәк", "Томан", "Таштуғай", "Шарлы урман", "Өйҙөрәкәй буйы", "Ашҡаҙар", "Уйыл", "Малбай","Ҡаһым түрә", "Шаһибәрәк", "Тәфтиләү", "Ҡарауаһарай", "Ғайса" йырҙарынан тыш, һирәк башҡарылған "Ирәмәл", "Искәндәр", "Һунар көйө", "Юныс", "Сираев", "Туғанай", "Байҡайын", "Етем ҡыҙ Хәтирә" кеүек башҡа бик күп йырҙарҙың тарихы буйынса мәғлүмәт бирелгән. Тимәк, киләсәктә йырсыларыбыҙҙың репертуарында һирәк башҡарылған йырҙар менән бер рәттән, теге йәки был йырҙың төрлө вариантта башҡарылыуын да ишетә аласаҡбыҙ.

Халҡыбыҙҙың йыр хазинаһы, әлбиттә, 400 һаны менән генә сикләнмәй, сөнки был китапҡа ни бары 80-се йылдарға тиклем йыйылған йырҙар ғына индерелгән. Ә ул ваҡыттан алып бөгөнгәсә тағы ла күпме йырҙар табылды һәм яҙып алынды! Шуға күрә киләсәктә, Алла бойорһа, "600 башҡорт халыҡ йыры", "800 башҡорт халыҡ йыры", "1000 башҡорт халыҡ йыры" кеүек йыйынтыҡтарҙы ла ҡулға алырға яҙһын. Амин, шулай булһын!

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӨНДӘШМӘҮ АЛТЫН, ТИП...

## алтын һүҙең йәшермә

Атаһыҙ бала алты кешегә хаслыҡ итер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ ир-егеткә "Һин иң аҡыллыһы" тип әйтә икән, ул, тимәк, башҡа бының һымаҡ ахмаҡты тапмаясағына инанған.

**(Фаина Раневская).**

Элек бары тик ирҙәр генә яҙа белгән, шуға ла ир-авторҙар донъялағы бар бәхетһеҙлектәрҙе ҡатын-ҡыҙҙарға япһарған.

**(Самюэль Джонсон).**

Бар донъя - театр. Ундағы ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ирҙәр ҙә - барыһы ла актерҙар. Уларҙың һәр береһе бер нисә роль уйнай.

**(Вильям Шекспир).**

Күк есемдәре - кеше яҙмыштары менән, ә Хоҙай күк есемдәре менән идара итә.

**(Келларий).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Боронғо Һиндостанда тәбиғәт күренештәре менән бәйле бик күп тылсымлы йолалар атҡарыла торған булған. Мәҫәлән, дин әһелдәре ямғыр яуҙырыу тураһында доға ҡылып, йола башҡарылыу менән ямғыр яуа торған булған. Доғаларҙың тәьҫирлелеген дә, уларҙы үтәү тәртибен дә яҡшы белгән бер кеше берҙән-бер көндө байлыҡ һорап, байлыҡ аллаһы Лакшмиға төбәп, доғалар ҡыла башлаған. Ун йыл дауам иткән уның был доғалары. Әммә ошо тиклем ваҡыттан һуң ул ысынында бай кешенең хәле нисек буласағын аңлау дәрәжәһенә еткән һәм төпкөл бер ауылға китеп, ер һөрөп, иген үҫтереп, ысын хеҙмәт кешеһенә әйләнеп көн итә башлаған.**

**Бер саҡ эштән арынып, доға уҡып ултырһа, алдына иҫ киткес һылыу ҡатын килеп баҫҡанын күргән.**

**- Һин кем һәм бында ни эшләйһең? - тип һораған кеше был ҡатындан.**

**- Мин байлыҡ аллаһы Лакшми, һин ун йыл буйы миңә доғаларыңды ебәргәйнең, бына хәҙер килдем һәм һине бай кешегә әйләндермәксемен, - тигән ҡатын.**

**- О, ҡәҙерле Лакшми, - тип ҡысҡырып ебәргән кеше, - доға уҡып, һиңә үтенестәремде ебәргән йылдарҙа мин бай кешеләрҙең яҙмышы әллә ни матур булмағанын, тир түгеп табылған ризыҡтың татлыраҡ икәнен белергә өлгөрҙөм. Шунан инде байлыҡҡа булған ҡыҙыҡһыныуым юҡҡа сыҡты. Һин һуңланың. Тик әйт әле, ни өсөн һин элегерәк килмәнең һуң?**

**- Тураһын әйтәм, - тигән Лакшми. - Һин, әлбиттә, изге кеше, доғаларыңды һәм йолаларҙы ла теүәл башҡарҙың, байлыҡҡа ла лайыҡһың. Шуға ла мин һине яраттым һәм һиңә изгелек теләгәндән һиңә килергә ашыҡманым..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 1873